ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискe Өфө

9-15 март (буранай) 2019

№ 10 (844)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле


## БЫЛ҆ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың...** барыһы ла матур! 3



**Өҫтәлдәребеҙҙә...** милли ризыҡтарыбыҙ булһын 6



**Ҡатын-ҡыҙҙың асылы ни?** 8-9



**Минең тамырҙарым ауылда** 11



**ТВ-программа** 14


***Мөхтәрәм ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы байрам менән ҡотлайбыҙ! Байрам менән һеҙҙе Башҡортостан Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Хәбиров, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин, бөтә ир-егеттәребеҙ ҙә ҡотлай. Теләктәр бер: һау-сәләмәт булығыҙ. Фиҙәкәр хеҙмәтегеҙ, яҡты уй-ниәттәрегеҙ, ныҡлы рухығыҙ, изге башланғыстарығыҙ менән Башҡортостаныбыҙҙы ҙурлап, нурлап, күтәрмәләп йәшәгеҙ!***

*БАЙРАМ МЕНӘН!*

## АҒИНӘЙҘӘР ҺЫМАҠ БУЛҺЫН...

*Ҡаушап ҡалып, юҡҡа-барға "аһ" тимәйҙәр,*
*Ауырлыҡтар уртаһында баш эймәйҙәр.*
*Арабыҙға насарлыҡты индермәйҙәр,*
*Милләт хәлен яҡшы яҡҡа әй көйләйҙәр,*
*Аҡ күлдәкле, аҡ яулыҡлы ағинәйҙәр!*

*Юл ярырҙай юлбашсылар артта ҡалған,*
*Ярты йортто ғәфләт-йоҡо баҫып алған.*
*Алдатмаһын аңыбыҙҙы хәйлә-ялған,*
*Заманыбыҙ иңебеҙгә бурыс һалған.*

*Ишәккә иш түгел ажар аттарыбыҙ,*
*Илгә хужа булыр затлы заттарыбыҙ.*
*Иманына килер әле ҡарттарыбыҙ,*
*Уңыш бирер сиҙәмдәрҙе аҡтарырбыҙ.*

*Уянайыҡ, беҙҙе йоҡо баҫып алған,*
*Әй дуҫтарым, көнөбеҙмө шуға ҡалған?*
*Тыңләшһен, тим, бөркөттәргә ир-егеттәр,*
*Ағинәйҙәр һымаҡ булһын аҡһаҡалдар!*

**Рауил БИКБАЕВ,**
**Башҡортостандың халыҡ шағиры.**



*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Ни өсөн ғаилә эсендәге хәлдәр дәүләт көйләүенән ситтә ҡала, ни өсөн ҡатын-ҡыҙға ҡарата көс ҡулланыуҙар закон тарафынан иҫкәртелмәй?

***Сәлиә МЫРҘАБАЕВА, медицина фәндәре докторы, БДМУ профессоры, V-VI саҡырылыш РФ Дәүләт Думаһы депутаты:*** Депутатлыҡ эшмәкәрлеген башҡарған йылдарҙа минә ғаилә-көнкүреш шарттарында ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарата көс ҡулланыуға ҡаршы закон проектын әҙерләү буйынса бик күп шөғөлләнергә тура килгәйне. Үкенескә, был закон ҡабул ителмәне. Ғөмүмән, һәр заманда ла актуаллеген юғалтмаған был мәсьәлә буйынса Дәүләт Думаһына 1995 йылдан бирле закон проекттары бер нисә тапҡыр тәҡдим ителә тороуға ҡарамаҫтан, ул һәр ваҡыт кире ҡағылып килде. 2017 йылда ғаиләлә көс ҡулланыу енәйәт яуаплылығы булыуҙан туҡтатылып, административ хоҡуҡ боҙоу төрө тип үҙгәртелде һәм бының өсөн 30 меңгә тиклем штраф, йәки 10-15 тәүлеккә ҡулға алыныу, йә булмаһа, 60-120 сәғәтлек мәжбүри эшкә йәлеп итеү ҡарала. Ә бит Рәсәйҙә көс ҡулланылыусы күпселек ауыр енәйәт ғаиләлә ҡылына. "Московский комсомолец" гәзите, мәҫәлән, ошо темаға арналған бер мәҡәләһендә былай тип яҙып сыҡҡайны: "Рәсәйҙә ғаиләлә көс ҡулланыу сәбәпле 40 минут һайын бер ҡатын-ҡыҙ зыян күрә. Ауыр енәйәттәрҙең 40 процентҡа яҡыны һәм үлтереү осраҡтарының һәр унынсыһы ғаиләлә башҡарыла. Былтыр 9 айҙа, мәҫәлән, ғаилә конфликттарында 500 ҡатын-ҡыҙ, 56 бала һәләк булған..." Бындай миҫалдар артынан алыҫ йөрөргә түгел, улар үҙебеҙҙә лә етерлек: күптән түгел бөтөн илде тетрәткән Учалы ваҡиғаһы ғына ни тора... Ә шул уҡ ваҡытта ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарата көс ҡулланыу факттарын иҫкәртеү, уларҙың хәүефһеҙлеген законлы яҡлау буйынса беҙ әҙерләгән закон проектына ҡаршы килеүселәр күҙҙәрен дә йоммай ғаилә конфликтына ҡыҫылмауҙы хуп күрә: йәнәһе, күп осраҡтарҙа ир менән ҡатын яраша ла, ҡатын кеше полицияға биргән ғаризаһын кире ала. Минеңсә, ярашыуҙан бигерәк, ҡатын-ҡыҙ ғаризаһын көс ҡулланыусы яғынан баҫым яһалыуҙан, үс алыуҙан ҡурҡып та барып алыуы билдәле. Әйткәндәй, яңыраҡ ҡына Мәскәүҙә булып үткән "Ҡатын-ҡыҙҙар көс ҡулланыуға ҡаршы" тип аталған конференцияла сығыш яһап, Кеше хоҡуҡтары буйынса уполномоченный Татьяна Москалькова ғаиләлә көс ҡулланыуға ҡаршы законды ҡабул итеү кәрәклеген һыҙыҡ өҫтөнә алды һәм был проблемалар буйынса кисекмәҫтән ҡыҙыу бәйләнеш линияһы асырға тәҡдим итте. Сөнки, тине ул, ҡатын-ҡыҙҙар өсөн Бөтә Рәсәй ышаныс телефоны мәғлүмәттәре буйынса, көс ҡулланыуҙан зыян күргән ҡатындарҙың 60 проценты бер ҡасан да полицияға мөрәжәғәт итмәгән, ә мөрәжәғәт иткәндәрҙең 78 проценты "ярҙам"дан ҡәнәғәт түгел. Шулай итеп, ғаиләлә зыян күргән ҡатындар даими рәүештә үҙҙәренең хоҡуҡтарын яҡлауға ҡамасаулыҡ иткән төрлө мәсьәләләр менән осраша. Шуға күрә лә "Ғаилә-көнкүреш шарттарында көс ҡулланыуҙы иҫкәртеү тураһында" күптән әҙер булған закон проектын ҡабул итеү күп мәсьәләләрҙе көйләргә, яҙмыштарҙы ҡотҡарып ҡалырға мөмкинлек бирер ине.


**(Дауамы 2-се биттә).**


12+

ИР-ЕГЕТ ҺҮҘЕ

# ҠАТЫН-ҠЫҘҘАРЫБЫҘҘЫҢ...

## барыһы ла матур!

**Үҙем ир затынан булараҡ, һүҙемде ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың матурлығы тураһында алып бармаҡсымын. Ә ир халкының шундай сифаттарын баһалауҙы ҡаршы енес вәкилдәренә тапшырайыҡ.**

Башта бер аҙ ғына бала сағыма сәйәхәт итеп, үҙемдең матурлыҡ төшөнсәһенә ҡарашымдың нисек үҙгәрә барғанын бәйән итәйем. Бәләкәй саҡта, һәр төрлө кешеләрҙең йөҙөн сағыштырып, "Фәләнбикә апай - матур" йәки "ямаҡай", тип, уларға үҙемсә баһа биреүемде хәтерләйем. Ҡайһы саҡта "калай матур ғына" тип йөрөгән берәй апай ауыҙынан яман һүҙҙәр ишетеп, быны көтөлмәгән хәл һымаҡ ҡабул итеп, аптырай инем. Уның матурлығы минең күҙ алдымда юйылып бөткәне лә хәтеремдә. Ә бәғзе ваҡыт, киреһенсә, тәү ҡарауҙа ямаҡ булып тойолған берәй апайҙың яғымлылығын күреп, уның йөҙөнөң матурланып киткәнен күрә инем... Әле бала ғына булыуыңа ҡарамаҫтан, тиҫтер ҡыҙҙарҙың йөҙөнә иғтибар итеү һәр малайға хастыр. Күҙҙәре, керпек, ҡаштары, танау һәм ирендәре идеалыңа, йәғни, хыялыңдағы ҡыҙҙыҡына тап килә икән, һинең өсөн ана шул ҡыҙ ғына донъяла иң матуры булып тойола. Тәү ҡарауҙа ғашиҡ булыу мәлдәре, башлыса, ун ике-ун өс йәштәрҙәге осорға тап килә. "Быйа нимә икән ул ҙур апай-ағайҙар гел генә телгә алған беренсе мөхәббәт!" тип уйланаһың ана шул ваҡытта. "Мин һине тәү күреүҙә үк оҡшаттым! Һин - Ер йөҙөндәге иң матур ҡыҙ!" тип, әле алтынсы-етенсе генә синыфта уҡып йөрөгән "Фәләнбикә"гә записка-лар яуҙырыусы, мәктәп коридорында йәйһә урамда ҡаршыңа тап булған был ҡыҙыйҙы күреү менән һүҙһеҙ ҡалып, оялыштан ҡыҙарынып, ҡарашын йәшереп уның янынан үтеп киткән "епшек" малай ҙа тик бер мин генә булмағанмындыр, моғайын. Ғишыҡтан башы әйләнгән малай өсөн был ҡыҙҙың бер генә лә етешһеҙлеге юҡ, уның кәләүҙәре, атлап йөрөштәре, һәр бер әйткән һүҙе лә шундай матур! Кейгән мәктәп формаһы ла башҡа ҡыҙҙарҙыҡынан йәмлерәк. Хатта уның "мыршылдатып" танау тартыуына ҡәҙәр үҙенә килешеп кенә тора. Ул ғына ла түгел, был "Фәләнбикә"нең атаһы, әсәһе һәм башҡа туғандары ла һинә яҡын тойола башлай... Синыфташтарыңдың береһе был ҡыҙ адресына берәй килешмәгән һүҙ әйтеп кенә ҡараһын, уның "икмәк шүрлегенә менеп төшөүгә" лә күп һорамайһың...

Тағы ике-өс йылдан, инде егет ҡорона инеп килгән кешегә әлеге ҡыҙ элеккерәккә ҡарағанда ла матурыраҡ булып тойола башлауы тәбиғи. Ә бәғзе ваҡыт - киреһенсә... Мәктәпкә күрше ауылдан туғыҙынсы-унынсы синыфҡа уҡырға килгән икенсе бер ҡыҙҙы шәйләп ҡалаһың. Йөрөгәндәге әле күптән түгел " һылыуҙарҙан һылыу" булған "Фәләнбикә" урынына һиҙҙермәй генә "Төгәнбикә" килеп урынлашыуына үҙең дә ғәжәпләнәһең. Баштағыһы, әйтәйек, ҡуңыр сәсле, ҙур йәшел күҙле, бер аҙ ғына йыуантағыраҡ булһа, быныһы - сөм ҡара сәсле, муйылдай сөм ҡара күҙле, нәҙек буйлы... Хәҙер инде һинең өсөн ошо ҡыҙ - бар донъяла иң сибәре...

Егерме-егерме биш йәштәр тулып, инде башлы-күҙле булыр ваҡытың етеүгә, күңеленә оялап, күпмелер ваҡыт тороп сығып киткән ҡыҙҙарҙың байтаҡ ҡына булып киткәненә аптырайһың. "Тәүге һәм ысын мөхәббәт" тигән төшөнсәнең тормошта барлығына әкренләп кенә икеләнә, ә матурлыҡтың фәҡәт сағыштырмаса ғына булыуы хаҡында уйлана башлайһың. Ысынлап та, кемгәлер матур булып тойолған ҡыҙ икенсе берәүгә, киреһенсә, һис кенә лә оҡшамауы мөмкин. Бер мәл, яратып, осрашып йөрөгән ҡыҙым хаҡында бер танышым: "Был ҡыҙға нисек күҙең төштө? Ҡапҡара бит!" - тигәйне. Ә минең өсөн донъяла тап ошо ҡыҙҙан да матурыраҡ һис бер кем юҡ бит, ауыҙына май булғыры! Иң ҡыҙығы: күпмелер ваҡыттан мине тәңкитләгән әлеге танышым күрше ауылда йәшәгән ҡара Хәйриҙең ҡыҙына өйләнде. Уның йәш кәләше - нәҡ атаһы, минекенә ҡарағанда күпкә ҡараҡ! Тормош тап ана шул үҙенең бихисап төрләләге менән дә матурҙыр. Беребеҙгә гүзәлдәребеҙҙең ҡара ҡашлы, ҡара күҙләре оҡшаһа, икенселәребеҙҙең күңеленә һоро, зәңгәр, йәшел күҙлеләр хуш килә.

Бәғзе бер ир-егеттәр ҡыҙҙарҙың буй-һынына ла ныҡ иғтибар итеүсән. Мин үҙем бер ҡасан да уға әһәмиәт бирмәнем. Әлеге көндә лә талдай нәҙек билләме ул, әллә тулыраҡмы, тәпәшерәк йәиһә бейегерәкме, оҙон йә ҡыҫҡа ботломо, ҡарағусҡыл төҫтәме, әллә аҡ йөҙләмө - ҡатын-ҡыҙҙар барыһы ла тик матурлыҡтан ғына тора, тигән инаныуҙамын. Үкенескә, тап бына ошо мәсьәләлә бәғзе бер ҡатын-ҡыҙҙар комплекслаНыусан, йәнәһе лә, ул башҡаларға ҡарағанда йөҙгә йәмһеҙерәк, буй-һыны ла килбәтһеҙ һ.б. Ошолай хаталаныусы ҡыҙҙарыбыҙға: "Төптән дөрөҫ булмаған бындай фекерегеҙҙе күңелегеҙҙән бөтөнләйгә юйып ташлағыҙ", - тип әйтке килә. Беҙ, ир-аттар, һеҙҙең барығыҙҙы ла "гүзәл зат" тип атайбыҙ. Аллаһы Тәғәлә һәммәгеҙҙе лә берҙәй нәфис, матур итеп яралтҡан. Ә "быныһы - матур, тегенеһе - ямаҡай" тигән баһалауҙар һәр кемдең субъектив фекерләүе нәтижәһе генә. Аллаһы Тәғәлә бер ҡасан һәм бер кемгә ғәҙелһеҙлек ҡылмай. Ул бар ҡатын-ҡыҙ затының йөҙөн генә түгел, ә бөтә тәнен (хатта сәс толомдарын да!) матур, ир-ат халҡын ҡыҙыҡтырырлыҡ, гүзәл итеп яралтҡан. Ана шул күҙ ҡыҙҙырырлыҡ матурлыҡҡа ситтәр иғтибар итеп, уға ҡарап гонаһҡа батмаһын өсөн, шулай уҡ башҡаларҙың күҙе теймәһен өсөндәр, динебеҙ ҡанунына ярашлы, ҡыҙҙарыбыҙға тәненең күп кенә өләшөн ҡаплап йөрөү лазым. Икенсенән, ят күҙҙәрҙән һаҡланып йөрөүҙе ошо нәфистәрҙән нәфис заттарыбыҙҙың ғорурлыҡ билдәһенең береһе тип тә ҡарау кәрәк...



Әлегә тиклем башлыса тышҡы матурлыҡ хаҡында ғына һүҙ алып барҙым. Кемдәндер "матур тышлы, әммә насар эстәлекле китап", "ялтыр ҡағыҙға төрөлгән сифатһыҙ кәнфит"тәрҙең дә булыуы хаҡында иҫкә төшөрә башлауын ҡуҙаллап, бер аҙ ғына булһа ла "эскәрәк инеп" сығыу ҙа зарурҙыр, тип уйлайым. Бала сағымда олораҡтарҙың ошондайыраҡ йырҙар йырлағанын ишеткәнем бар:

*Ана килә автомобиль,*
*Туктатығыҙ конторға!*
*Аңын-тоңон белмәйенсә,*
*Ҡыҙыкмағыҙ матурға!..*

Күп нәмәне әле тик өҫтән генә уйлау һәләте булған малай булыуыма ҡарамаҫтан, кешеләрҙең фәҡәт тышҡы ҡиәфәтенә генә алданырға ярамағанлығы хаҡындағы ошондай йырҙарҙың ишараһын аңлай инем шулай ҙа. Барса ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы тыштан матур тип һанаһам да, инде аҡһаҡалдар ҡорона ингән кеше булараҡ, уларҙы башлыса эстәлегенә ҡарап баһаларға тырышам. Ә инде йәш-елкенсәккә килгәндә, бәғзеләрҙең минең менән әллә ни килешеп етмәүе лә мөмкин. Беҙ ҙә ҡасандыр улар һымаҡ бер аҙ еңелерәк уйлай торғайныҡ бит...

Баштараҡ, ир затының матурлығын баһалауҙы ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙға тапшырайыҡ, тиеүемә ҡарамаҫтан, үҙебеҙгә ҡағылышлы фекеремде лә бер аҙ әйтеп китәйем. Теге йәки был ҡатын-ҡыҙ нисек итеп күрһә, беҙ - шулайбыҙ. Беҙҙең яҡтарҙа әйтмешләй, "азый-бозой" ҡарашлы, йәғни усал сырайлы, "карсыға йәиһә картуф танаулы", "карпыш ҡолаҡлы"мы, Бөрйән айыуы һымаҡ, ҡабаланмай ғына, алпан-толпан баҫып йөрөгән "арҡыры аяҡлы"мы, әллә, киреһенсә, утҡай ҡыҙыу, ярыш атындай "ярһыу холоҡло" булайыҡмы, гүзәл заттарыбыҙ барыбер беҙҙе һайлап ала. Ир-аттың физик яҡтан көслө, бер аҙ тупаҫыраҡ, ҡатыраҡ, һалҡыныраҡ тәбиғәтле булыуы, ҡыҙҙарыбыҙҙан айырмалы, йөҙгә лә әллә ни ныҡ һылыу булмауы ла - норма, тигән инаныуҙамын. Аллаһы Тәғәлә хатта беҙҙең биттәребеҙҙе лә йөнлө итеп яралтҡан! Үҙебеҙҙең ошондай сифаттарыбыҙҙы белгәнгә лә, йәштәр уйыны мәлендә ҡыҙҙарҙың беҙгә ҡарап әйткән таҡмаҡтарын да ауырға алмай торғайныҡ:

*Шырпы ҡабы, шырпы ҡабы,*
*Шырпы ҡабы бушаған.*
*Беҙҙең ауыл малайҙары*
*Шүрәлегә окшаған.*
*Ар якта ла ҡомалаҡ,*
*Бир якта ла ҡомалак.*
*Беҙҙең ауыл егеттәре*
*Төп-төпәр ҙә тумалаҡ...*

Ҡатын-ҡыҙҙың да зауыҡы төрлөсә булалыр шул. "Тупай күҙле", йәиһә "шүрәлегә оҡшаған", "төптөпәр, тумалаҡ", ауыҙ-мороноҙ йөнлө булыуыбыҙға ҡарамаҫтан, ана шул ҡыҙҙар ваҡыты еткәс барыбер беҙҙе тормош иптәше итеп һайлай бит...

Әйткәндәй, ир-егеттәрҙең йөҙөнә ҡағылышлы "сибәр егет", "матур ир", "һылыу абышка" һымағыраҡ һүҙҙәрҙе, ир кеше булараҡ, нишләптер өнәп етмәйем (мәҫәлән, "айыуҙай көслө ҡатын", тип маҡталған ҡатын-ҡыҙ ҙа бындай баһалауҙы оҡшатмаҫ ине, моғайын). Ә ир-ат адресына әйтелгән "батыр", "азамат", "арыҫлан", "айыу", "бөркөт", "ыласын" һымағыраҡ һүҙҙәр күңелгә нығыраҡ ята. Һәр хәлдә беҙ, ир-егеттәр, "айыу тотоп менерҙәй", "типһә - тимер өҙәрҙәй", "күш йөрәкле" һәм, әлбиттә, "алтын ҡуллы", "алтын башлы" тигән һымағыраҡ баһаға лайыҡ булырға ынтылырға тейешбеҙ.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔ Башҡортостандың Сибай ҡалаһында буҙа етештерә башланылар. Шәхси эшҡыуар Гөлназ Азатова милли эсемлек етештереү цехын асты. Ҡорамалға 500 мең һумдан ашыу аҡса йүнәлтелгән. Аҙнаһына 600 литрға яҡын буҙа етештерелә. Киләсәктә Гөлназ Азатова көнөнә 500 литр эсемлек етештерергә һәм буҙаны магазин кәштәләрендә күрергә теләй.

✔ Башҡортостанда 2019 йылдың ике айында тыуған 88-се игеҙәк Ғафури районында теркәлгән. Илгиз менән Данис Йәғәфәровтар - районда ҡыштың һуңғы айында донъяға килгән өсөнсө игеҙәктәр. Сабыйҙарҙың тыуыуы атаәсәне ишле ғаиләләр рәтенә индерҙе: өйҙә тағы ике бала бар. Мәғлүмәттәр буйынса, ағымдағы йылдың ғинуар-февраль айҙарында Башҡортостанда 88 игеҙәк ауаз һалған. Күбеһе Өфөлә - 41, артабан Стәрлетамаҡ килә - 5 һәм Ғафури районы - 3.

✔ "Рәсәй тимер юлдары" сайтында пассажир поездарында онотолоп ҡалған әйберҙәрҙе эҙләү сервисы эшләй башланы. Поезда ҡалған әйберҙәрҙе эҙләү өсөн пассажирға "Рәсәй тимер юлдары" асыҡ акционерҙар йәмғиәтенең рәсми сайтындағы "Пассажирҙарға" бүлегендә электрон ғариза тултырырға кәрәк. Анкетала исем-шәрифте, билеттың номерын, телефонды, электрон почтаны һәм билет алынған документ номерының һуңғы дүрт һанын күрһәтеү талап ителә. Шулай уҡ онотолоп ҡалған әйберҙәрҙе һүрәтләү һәм вагондағы урынды күрһәтеү зарур.

✔ Башҡортостанда йыл башынан 559 ВИЧ-инфекциялы асыҡланған, тип хәбәр иттеләр республиканың СПИД-үҙәгендә. Улар - 203 ҡатын-ҡыҙ һәм 356 ир-егет. Уларҙың 43-сө федераль яза башҡарыу хеҙмәте учреждениеларында ултыра. 2018 йылдың ғинуар-феврале менән сағыштырғанда сирләүселәр 17,4 процентҡа артҡан. Төбәктә бөтәһе 21618 пациент иҫәптә тора (8479 ҡатын-ҡыҙ һәм 13139 ир-егет).

✔ Башҡортостандың Әбйәлил районындағы Яҡтыкүл Рәсәйҙә күлдәр араһында иң популяр ял итеү урыны булды. Tvil.ru торлаҡ бронлау сервисы ошондай мәғлүмәттәр килтерә. Яҡтыкүлдән тыш, туристарҙың яратҡан биш урыны иҫәбенә Ырымбур өлкәһенең Соль-Илецк ҡалаһы, Тверь өлкәһенең Селигер күле буйындағы Осташков ҡалаһы, Алтай крайының Большое Яровое күле буйындағы Яровое ҡалаһы һәм Иркутск өлкәһенең Байкал күле ярындағы Байкальск ҡалаһы индерелде.

## ҠЫҘ-ҠАТЫН ҺҮҘЕ

**Матур уйлы, матур эштәр эшләп йәшәгән кешенең ғүмере лә матур үтә, тип уйлайым мин. Тағы ла бер серем бар: булғанына риза була белеү. Һин ниндәй генә бай булһаң да, һинән байыраҡтар һәр саҡ буласаҡ. Йәшерәктәр ҙә, матурыраҡтар ҙа, уңышлыраҡтар ҙа... Кеше уңышына көнләшеп түгел, һөйөнөп ҡарарға кәрәк - был да бер талант.**

# МАТУР УЙЛЫ БУЛАЙЫҠ!

Мин, мәҫәлән, бер ҡасан да үҙемә артыҡ иғтибар, юғары баһа көтмәйем, әгәр кемдер маҡтай икән - артыҡ ышанып та бармайым. "Кемдер әрләй тиеп бошонмайым, кемдер маҡтай тиеп осонмайым - бына шундай миндә бер ғәҙәт", - тип яҙған инем бер шиғырымда. Артыҡ иғтибарҙан оялам. Ғөмүмән, мин оялсан кеше. Ниндәйҙер хис ҡапыл ярһытып ебәрһә, оятты артҡа ташлап, ҡыйыу шиғыр ҙа яҙып ҡуя торған холҡом бар. Тиҫкәрелегем дә етерлек. Тапалған юлдан йөрөргә, кемдәргәлер ярарға тырышып йәшәй алмайым. Үҙһүҙлемен. Ләкин кешеләрҙе яратам. Һәр кемдә лә ниндәйҙер матурлыҡ бар - мин шуны эҙләйем. Тағы ла мин кисерә беләм. Ваҡ-төйәк етешһеҙлектәрҙе, хаталарҙы еңел кисерәм.

Шиғыр - минең өсөн йөрәк төбөндәге хистәремдең сағылышы. Ул урғылып, ҡайнап килеп сығырға тейеш. Мине нимә уйландыра, әсендерә, хисләндерә, бошондора, тулҡынландыра - барыһы ла шиғырҙарымда сағылыш таба. "Минең уйлағанды, минең хис-тойғоларымды һеҙ үҙ шиғырҙарығыҙҙа яҙаһығыҙ", тигән хаттарҙы йыш алам. Мин үҙем дә бит ябай бер кеше, башҡаларҙы борсоған уй мине лә борсой икән, был бик дөрөҫ. Бөтәһе лә был турала асыҡтан-асыҡ, ҡысҡырып әйтә алмай, ә мин әйтә алам икән - афарин!

Минең шиғриәтем - бик шәхсән шиғриәт. Донъяға булған ҡарашым - шиғырҙарымда. Ниндәйҙер фекер күңелдә тетрәндерһә, шиғыр юлдары үҙенән-үҙе тыуа. Тирә-яҡ мөхит, кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәр, шәхси кисерештәр яныңан-яңы темалар бирә. Мин дә әсенәм, шатланам, һыҙланам, уйланам. Бөтә яҡтан да камил кеше булмайҙыр ул. Мин дә камил түгелмен. Әммә камиллыҡҡа ынтылам. Байтаҡ кешенән айырмалы рәүештә, мин был турала ҡурҡмай әйтә алам.

Ә инде ижадыма мин күберәк яратҡан шөғөл, йәғни хобби итеп ҡарайым. Кемгәлер минең яҙғаным оҡшай икән - рәхим итеп уҡыһындар! Оҡшамаһа - уҡымаһындар...

**Фирүзә АБДУЛЛИНА.**

## ТӨРЛӨҺӨНӘН



## ЮЛДАР, ЮЛДАР...

**Республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров Башҡортостан Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә төбәктә "Тыуған урам" программаһын ғәмәлгә ашыра башлауҙары хаҡында белдерҙе.**

Уның асылы шунда: һәр үҫешкән ауылда үҙәк урамға буйһа ла асфальт түшәлергә тейеш. "200 метр йәки 1,5 саҡрым булһынмы, ауылда йәшәүселәр яҙлы-көҙлө осорҙа үҙҙәрен уңайлы тойһон өсөн ул асфальт ятмалы булырға тейеш", - тип билдәләне Радий Хәбиров. Республика етәксеһе һүҙҙәренсә, "Тыуған урам" программаһы 2024 йылға тиклем иҫәпләнергә һәм ниндәй урамға асфальт түшәргә кәрәклеген ауыл халҡы сходтарҙа үҙҙәре хәл итергә тейеш. Программаның үтәлеше өсөн яуаплы итеп Башҡортостан Хөкүмәте вице-премьеры вазифаһын башҡарыусы Рәиф Әбдрәхимов тәғәйенләнде. Башҡортостандың Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитеты рәйесе Тимур Мөхәмәтйәнов һөйләүенсә, республикала бөтәһе 11 мең саҡрымдан ашыу автомобиль юлына ваҡ таш һибеп сығырға кәрәк. Бының өсөн 5,7 миллиард һум кәрәк. Иглин, Ҡырмыҫҡалы, Баймаҡ һәм Янауыл райондарында ихтыяж ҙур. Радий Хәбиров Хөкүмәткә ошо мәсьәләне тикшерергә һәм аҙна эсендә тәҙәтмәләр индерергә ҡушты.

## АҒАС СИТКӘ КИТӘ...

**Республиканың урман сәнәғәте комплексында уға һәҡсыл мөнәсәбәт мәсьәләләре тәүгә урынға сыға. Ҡариҙел районының Ҡариҙел ауылында барған "Ресурстар, партнерлыҡ, интеграция" республика урман форумының пленар ултырышында республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров ошо хаҡта белдерҙе.**

Уның һүҙҙәренсә, урманды законһыҙ ҡырҡыу тураһында хәүефле мәғлүмәт йыш килә, айырыуса республика сигенә яҡын райондарҙан. Контролдә тотоусы органдарҙың тырышлығына ҡарамаҫтан, урманды ҡуртымға алған компаниялар аҙаҡ бының менән шөғөлләнмәй һәм урман участкаларын ҡуртымға бирә. Ағас экспортҡа сығарыу мәсьәләһе - ҙур проблема. "Башҡортостандан ағас сығарыуҙы кәметергә кәрәк. Быны менән беҙ бюджеттың да, халыҡтың да аҡсаһын юғалтабыҙ", - тине Радий Хәбиров. Республика етәксеһе төбәктең Тәбиғәттән файҙаланыу министрлығына сиккә яҡын райондарҙың биләмәһендә ауырлыҡ контроле хеҙмәттәрен урынлаштырырға ҡушты.

## ВӘКИЛЛЕКТӘР АСЫЛА

**Тиҙҙән Венала һәм Истанбулда Башҡортостан вәкиллектәрен асыу күҙаллана. Был хаҡта республика Хөкүмәтендә уҙған "Инвестиция сәғәте" кәңәшмәһендә билдәле булды.**

Кәңәшмәлә шулай уҡ Башҡортостандың тышҡы иҡтисади эшмәкәрлек йомғаҡтары ҡаралды, сауҙа-экспорт бәйләнештәрен яҡшыртыу мөмкинлектәре билдәләнде. Республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров сит илдәрҙә республиканың тышҡы иҡтисади вәкиллектәрен асыу идеяларын хупланы. "Әшебеҙҙең ике мөһим йүнәлешен Вена һәм Истанбул ҡалалары аша билдәләйбеҙ. Бары тик ойошторо формаһын яҡшы итеп уйларға кәрәк: Рәсәй сауҙа вәкиллектәрендә үҙебеҙҙең сауҙа йорттарын асырғамы әллә сит илдекен үҙаллы теркәргәме. Иң мөһиме, беҙҙең сит ил вәкиллектәренең штаты компактлы булырға һәм һөҙөмтәле эшләргә тейеш", - тине Радий Хәбиров.

## КҮПМЕ ТҮЛӘРГӘ?

**Башҡортостан Хөкүмәте 2019 йылға республика муниципалитеттары өсөн балалар баҡсаһына түләүҙең максималь күләмен билдәләне. Тейешле ҡарарға республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров ҡул ҡуйҙы.**

Документҡа ярашлы, Өфөлә һәм Өфө районында балалар баҡсаһы өсөн башҡаларға ҡарағанда күберәк түләргә тура килә - 2839 һәм 2627 һум.Стәрлетамаҡта һәм Дәүләкән районында балалар баҡсаһы өсөн түләүҙең максималь күләме яҡынса бер тигеҙ - айына 2550 һәм 2503 һум. Салауатта - 2366 һум. Алты муниципалитетта: Октябрьскийҙа, Нефтекамала, Иглин, Ҡалтасы, Бәләбәй һәм Учалы райондарында түләү 2200 һумдан ашыуыраҡ тәшкил итә. Йылайыр һәм Ауырғазы райондары ата-әсәләре өсөн был күрһәткес башҡаларҙан түбәнерәк - 1148 һәм 1185 һум. Быға тиклем закон балалар баҡсаһы өсөн түләү күләмен йыл дауамында бер нисә тапҡыр арттырырға мөмкинлек бирә ине. Хәҙер хаҡты йыл башында ғына күтәрергә була. Мәктәпкәсә учреждениеларҙа балаларҙы тәрбиәләгән өсөн түләүҙең уртаса күләме 1617,2 һум тәшкил итә. Түләүҙе кәметеүгә компенсация түләүҙәре күләме тап ошо сумманан сығып иҫәпләнә. Ата-әсәләр балалар баҡсаһына түләү өсөн компенсация алырға хоҡуҡлы, тип иҫкә төшөрҙөләр республика Мәғариф министрлығында. Әгәр ғаиләлә бер бала баҡсаға йөрөһә, компенсация түләнгән сумманан 20 процент (323,44 һум) тәшкил итә, икеү - 50 процент (808,6 һум), өс һәм унан да күберәк - 70 процент (1132 һум).

## БАЛАЛАР ӨСӨН

**Башҡортостанда Балалар клиник дауаханаһында республика балалар онкологияһы һәм гематологияһы үҙәген төҙөү күҙаллана. Ошо хаҡта Һаулыҡ һаҡлау министрлығының киңәйтелгән ултырышында министр вазифаһын башҡарыусы Максим Забелин белдерҙе.**

Шулай уҡ онкология сирҙәрен иртә асыҡлау өсөн алдағы өс йылда күп профилле дауаханаларҙа 13 амбулатор онкология ярҙамы үҙәген асырға тейештәр: дүртәүһе - Өфөлә, туғыҙы - республика ҡалаларында. Республикала онкология ауырыуҙарынан үлем күрһәткесе уҙған йыл менән сағыштырғанда 0,6 процентҡа артҡан. 2018 йылда яман шешле 3154 сирле асыҡланған - бынан элекке йылға ҡарағанда 769-ға күберәк. 500-ҙән ашыу шеш алды сирҙәре һәм аналыҡ муйынтығы яман шешенең 80 осрағы теркәлгән, шуларҙың 77проценты - ауырыуҙың иртә стадияһында. 200-ҙән ашыу яман шеш һәм 1300 рак алды сирҙәре асыҡланған. 6,6 меңдән ашыу осраҡта онкология ауырыуҙары иртә стадияла табылған. "Яман шештәрҙе иртә диагностикалауҙы арттырыу маҡсатында сирҙе башланғыс стадияһында тапҡан өсөн беренсел звено белгестәрен дәртләндереү системаһын индереү күҙаллана, - тине Максим Забелин. - Был медицина хеҙмәткәрҙәрен хәүеф төркөмөнә ҡараған пациенттар менән эшләүгә күберәк иғтибар биреүгә дәртләндерергә, диспансерлаштырыуҙың һәм скрининг тикшереүҙәренең сифатын күтәрергә тейеш".

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓ Шамил Абдраҡов Өфөнөң мәҙәниәт идаралығы етәксеһе итеп тәғәйенләнде. Әлегә тиклем Шамил Абдраҡов Башҡортостандың мәҙәниәт министры урынбаҫары вазифаһын биләне. Шамил Абдраҡов 1980 йылда Мәләүездә тыуған. Салауат музыка училищеһын, һунынан Өфө дәүләт сәнғәт академияһын тамамлаған.

✓ Өфө биатлонсыһы Эдуард Латипов Красноярскиҙа Ҡышҡы Универсиадала спринт ярышында алтын миҙал яуланы. Шуны билдәләп үтәйек: уҙған ярышта почет пьедесталына рәсәйҙәр генә күтәрелде: икенсе урынды Дмитрий Иванов алды, бронза миҙалды Никита Поршнев яуланы. Бынан алда "Башинформ" Өфө егете Эдуард Латиповтың 20 саҡрымлыҡ шәхси ярышта көмөш миҙал алыуы тураһында хәбәр иткәйне. Әлеге ваҡытта Рәсәй йыйылмаһы дөйөм команда миҙалдары иҫәбе буйынса алда бара: 14 алтын, 18 көмөш һәм 17 бронза миҙал.

✓ Өфөлә 2024 йылға 13 балалар баҡсаһы һәм 9 мәктәп төҙөү күҙаллана, тип хәбәр итте ҡала Советы ултырышында баш ҡала мэры Өлфәт Мостафин. Әлеге ваҡытта ҡалала өс йәше тулған 66 меңдән ашыу бала мәктәпкәсә учреждениеларға йөрөй. Ясле йәшендәге балалар өсөн мәктәпкәсә учреждениелар асыу бурысы тора, Өфөлә ошондай сабыйҙар 8,5 меңдән күберәк.

✓ 2018 йылда Башҡортостанда тыуым һәм аборттар һаны кәмегән. Был хаҡта республика Һаулыҡ һаҡлау министрлығында белдерҙеләр. "Тыуымды арттырыу өсөн 2018 йылда мотлаҡ медицина страховкаһы буйынса 1843 ЭКО процедураһы башҡарылған", - тип билдәләнеләр унда. Бынан алда 2018 йылда 2000 самаһы ҡатын-ҡыҙҙың бушлай ЭКО эшләтә алыуы тураһында хәбәр ителгәйне. 2017 йылда яҡынса 6 мең ЭКО процедураһы үткәрелгән, шуның 1500-ө - Мотлаҡ медицина страховкаһы иҫәбенә, йәғни бушлай.

✓ 2021 йылға Р-240 Өфө - Ырымбур трассаһын тулыһынса яҡтыртыу күҙаллана, тип хәбәр итә "Урал буйы" федераль автомобиль юлдары идаралығы. Ведомство юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген арттырыу проектын тормошҡа ашыра башлай. Яҡты юлдарҙа фажиғәләр ҙә аҙ булыр тип көтөлә. Яңы электр линиялары Булгак, Ергән, Яңы Отрада, Иҫке Отрада, Аҡһары, Яңы Мораптал ҡасабалары аша үткән Ырымбур трассаһының 113-сө саҡрым участкаһында ҡуйыла.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Өфө предприятиелары республика производствоһы күләменең 60 процентын тәьмин иткән. Ҡала иҡтисадының нигеҙе - уның бюджеты. Былтыр ул 27 миллиард һум, шул иҫәптән үҙенең килеме 12 миллиард һум була.*

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ



**Өфө ҡала хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә, ғәҙәттәгесә, теге йәки был тармаҡ буйынса яуаплы етәкселәр 2-3 минутлыҡ ҡыҫҡа отчет менән сығыш яһап, аҙна дауамында күҙәтелгән хәл-торош менән таныштырҙы.**

# ҮҘГӘРЕШТӘР КӨТӘБЕҘ!

Граждандар һағы системаһы эше буйынса МБУ начальнигы Рафаэль Әхмәтов белдереүенсә, ғәҙәттән тыш ваҡиғалар күҙәтелмәгән, тормош-көнкүреште тәьмин итеү системаларында авария һөҙөмтәһендә 14 тапҡыр эш туҡтатылып торһа, 49 янғын һәм 36 юл-транспорт ваҡиғаһы теркәлгән. Ҡыйыҡтан боҙ һәм ҡар төшөп, 5 кеше зыян күргән, 4 осраҡта ҡар автомобилдәр өҫтөнә төшкән. Аҙна дауамында ҡотҡарыу хеҙмәтенә 19075 шылтыратыу булған, улар буйынса ҡотҡарыусылар 47 урынға сыҡҡан, 17 кешегә ярҙам күрһәтелгән.

Ҡала хужалығы системаһындағы хәл-торош менән идаралыҡ начальнигы Никита Дмитриев таныштырҙы. Ошо ваҡытта ҡалала йылы, һыуыҡ һыу биреүҙе туҡтатып, электр энергияһы менән тәьмин итеүҙе һүндереп торорға тура килгән 14 осраҡ теркәлгән. 79 күп фатирлы йорт террриторияһын таҙартыу буйынса тикшереү үткәрелгән. Рейд һөҙөмтәләре буйынса 21 хеҙмәтләндереүсе ойошмаға административ эш асылған.

Транспорт һәм бәйләнештәр идаралығы начальнигы Владимир Петров белдереүенсә, пассажирҙарҙы ташыу буйынса бер ни тиклем үҙгәрештәр бар. 215 маршруттың маршруты оҙайтылып, был линияға хәҙер 10 автобус өҫтәлгән. Транспорт саралары етешмәгәнлектән, һаман да туҡталыштарҙа оҙаҡ ҡына көтөргә лә тура килә. Ә киске сәғәт 8-ҙән һуң "Башавтотранс" автобустары маршрутты хеҙмәтләндереүҙе туҡтата. Үткән аҙнала йәмәғәт транспорты ҡатнашлығында 9 юл-транспорт ваҡиғаһы теркәлгән, һөҙөмтәлә 11 кеше йәрәхәт алған. Был осраҡтарҙың алтыһында автобус водителдәренең ғәйепле булыуы асыҡланған. Шулай уҡ рельстарҙы боҙ ҡаплау һөҙөмтәһендә бер тапҡыр трамвай вагоны юлдан сыҡҡан һәм бер сәғәттән ашыу ваҡыт был төр транспорт хәрәкәте тотҡарланып торған.

Артабан ҡала хакимиәтенең Сәнәғәт һәм муниципаль предприятиелар менән эшләү, тариф көйләүе идаралығы начальнигы Елена Суворова февраль һуңында Өфөлә үткән Рәсәй сәнәғәт форумы сиктәрендә ҡала хакимиәте ойоштороған "Өфөнөң инновацион ҡеүәте" махсуслаштырылған күргәҙмәһе хаҡында һөйләне. Күргәҙмә эшендә биотехнологиялар һәм экология, приборҙар эшләү һәм электрониканан программа продукттары, роботтар эшләү өлкәләрендә эшмәкәрлек алып барған 40 яңы иҡтисад предприятиеһы ҡатнаша. Өфө трамвай-троллейбус заводының "Ҡала кешеһе" троллейбус моделе экспозицияһы ҡунаҡтарҙың иғтибарын йәлеп итә. Шулай уҡ "Технопарк - киләсәк ҡалаһы" ҡала белем биреү үҙәге экспозицияһы ла иғтибарҙан ситтә ҡалмай. Әлеге ваҡытта технопарк сиктәрендә 22 лаборатория эшләй, унда 1500 бала белем ала. Форумды рәсми ябыу тантанаһында Өфөнөң бер нисә ойошмаһы айырым номинацияларҙа дипломдар менән бүләкләнә.

Яҙ етә тиһәң дә, март беҙҙең төбәк өсөн бурандар, аҡман-тоҡман айы. Шуға тәбиғәттең көйһөҙләнеүенә лә әҙер булырға кәрәклеге бер кемгә лә сер түгел. Ә инде ҡала хакимиәтенең күҙ уңында һаман да юлдарҙы, тротуарҙарҙы, ихаталарҙы комплекслы таҙартыу темаһы тора. Был хаҡта хакимиәттең Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы начальнигы Рөстәм Хәмитов менән "Торлаҡ хужалыҡ идаралығы" МБУ-һы директоры Раил Мирхәйҙәров бәйән итте. Бөгөн баш ҡалала урам-юл селтәрендә дөйөм оҙонлоғо 1567,6 километр булған 1747 урам иҫәпләнә. Ҡышҡыһын барлығы 15 миллион квадрат метр самаһы юл таҙартыла. Көҙгө-ҡышҡы осорҙа коммуналь хеҙмәттәр 2 миллион кубометр ҡар сығара. Урам-юл селтәрен таҙартыуға барлығы 437 берәмек техника йәлеп ителә. Быйыл ҡар күпләп яуғанлыҡтан, таҙартыу эштәре көсәйтелгән режимда башҡарыла. Ҡала территорияларын ваҡытында таҙартыу өсөн комплекслы саралар ҡулланыла. Райондарҙың Торлаҡ хужалығы идаралыҡтары ҡарамағында 4625 күп фатирлы йорт бар, уларҙың эргәһендәге асфальтланған территория 5,3 миллион квадрат метр тәшкил итә, был майҙанды таҙартыу менән 167 берәмек техника шөғөлләнә. Шулай уҡ ҡыйыҡтарҙы ҡарҙан һәм боҙҙан таҙартыу эштәре лә башҡарыла.

Кәңәшмә һуңында ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин ихаталарҙы комплекслы таҙартыу графигы кеүек үк, ҡала территорияһындағы тротуарҙарҙы комплекслы таҙартыу буйынса ла график эшләргә һәм эште уға ярашлы алып барырға ҡушты.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Үткән аҙнала Өфө ҡала Советының сираттағы ултырышында ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин хакимиәттең 2018 йылғы эшмәкәрлеге буйынса йомғаҡтар менән таныштырғайны. Үҙ сығышында Өлфәт Мансур улы ҡаланың былтырғы социаль-иҡтисади үҫешен ҡылыҡһырлаусы төп күрһәткестәргә иғтибар йүнәлтеп, быйылға һәм яҡын киләсәккә билдәләнгән әһәмиәтле бурыстар менән таныштырҙы. Уның белдереүенсә, йыл яҡшы күрһәткестәр менән тамамланған. Оҙатылған сәнәғәт продукцияһы күләме 2017 йыл менән сағыштырғанда 25 процентҡа артып, 971 миллиард 600 миллион һумға еткән. Өфө предприятиелары республика производствоһы күләменең 60 процентын тәьмин иткән. Ҡала иҡтисадының нигеҙе - уның бюджеты. Былтыр ул 27 миллиард һум, шул иҫәптән үҙенең килеме 12 миллиард һум була. Республика ярҙамы менән муниципаль бурыс һәм уны хеҙмәтләндереү сығымдары кәметелә. Былтыр торлаҡ төҙөлөшө күләме 653 мең квадрат метр тәшкил итә. Социаль объекттар төҙөүгә лә етди иғтибар бирелә. "Быйыл беҙ республика ойошторолоуҙың 100 йыллығын байрам итәбеҙ, - тине Өлфәт Мансур улы. - Уға арнап, ҡалала дөйөм суммаһы 25 миллиард һумдан ашыу тәшкил иткән 24 объект төҙөлә..."**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ҠЫҘ-ҠАТЫН ҺҮҘЕ

# ИРКӘ БУЛЫУ ОҠШАЙ!



**"Һиңә иркә ҡатын булырға өйрәнергә ваҡыт", - тине бер мәл әхирәтем. Ыста, артыма ҡолап китә яҙҙым. Миңә? Иркә ҡатын булырға? Кит, юҡты һөйләмә! Нисек инде, ошоғаса үҙемде иҫ киткес көслө ҡатынға һанап, ҡулымдан бар эш тә килә тип йөрө лә, тота килеп иркә ҡатынға әйлән дә кит, имеш...**

Ҡалай уйға һалды әле ул әхирәтемдең был һүҙҙәре. Бәй...Ысынлап та, көслө булырға тырышып, бөтә эште иремдең алдынан алып эшләгәнмен, алдынан алып һөйләгәнмен, уға нимәнелер хәл итергә юл да ҡуймағанмын булып сыға түгелме?.. Ошоно аңлағандан алып, үҙемде ысын ҡатын-ҡыҙ итеп тәрбиәләй башланым. Ысын әйтәм, ауыр булды әйтер ерҙә лә өндәшмәй ҡалыуы, алдан сабыр урынға, ирем янында юрттырып ҡына барыуы. Әммә бер заман шуға иғтибар иттем: бәй, хәләлемдең иғтибары ғаиләгә күберәк төшә башланы түгелме, балалар менән минең ҡурсалауға, наҙға мохтаж икәнебеҙҙе, ниһайәт, тойҙо бит.

Иркә ҡатын булыуы миңә нығыраҡ оҡшай башланы!

Әйҙәгеҙ, әхирәттәр, бөгөндән алып бөтәбеҙ ҙә үҙебеҙҙе иркә генә тойоп, ирҙәребеҙҙе эштән май ҡояшылай йылмайып ҡаршыларға өйрәнәйек. Беҙҙең ҡулдан килә ул! Ә әлегә тик ултырмайыҡ, ашарға бешерә һалайыҡ. Шулай итеп... Тауыҡтың түш итенә тоҙ, төрлө тәмләткестәр һибеп, көнбағыш майына бутап, бергилке ултыртып торабыҙ. Йәғни, мәҫәлән, берәй ярты сәғәткә. Әйткәндәй, минең иң яратҡан тәмләткестәрем: паприка, хмели-сунели. Паприканы сәй менән татлы бәлешкә генә ҡушмайымдыр моғайын, ҡалған бөтә ризыҡҡа ла ҡушам, тиһәм дә була.

Ит әҙер булғандыр инде, хәҙер табаны майлап, итте һалабыҙ ҙа, мейескә тығабыҙ. Мейестең утын үтә ҡыҙыу итмәйем, берәй 50 минут тирәһе бешерәм. Шул тиклем тәмле, һутлы булып бешә. Хуш еҫе өйгә генә һыймай, ишек алдына тарала хатта. Итте тәрилкәләргә матур ғына итеп телемләп һалып, эргәһенә яҡындарығыҙ яратҡан гарнирҙы ҡушып ебәрһәгеҙ, тел йоторлоҡ була ла ҡуя. Эштән йонсоп, арып ҡайтҡан ирегеҙҙең дә һеҙҙең тәмле аштарығыҙҙан, нурлы йөҙөгөҙҙән күңеле асылыр, кәйефе күтәрелер.

Әхирәттәр! Шул тиклем дә матур тормошто йәмле итеп йәшәй белеүгә ни етә, шулай бит? Бер ауырлығы ла юҡтыр, өйрәнәйек әле ул иркә ҡатын булырға!

**Гөлназ ИШЕМҒОЛОВА.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Матур булайыҡ!

❖ Күҙ тирәһендә барлыҡҡа килгән һырҙарҙы шымартыу өсөн үҫемлек майын бер аҙ йылытып, ҙур булмаған етен туҡыманы шуға манып, күҙ ҡабаҡтарына һалырға. 15 минут ятып тороғоҙ. Компресты алғандан һуң, күҙ тирәһендәге тирене боҙ менән ышҡығыҙ, туҡландырыусы крем һөртөгөҙ.

❖ Ҙур булмаған һауыттың яртыһынан үҫемлек майы ҡойоғоҙ ҙа, ул тулғансы көнбағыш сәскәләре таждарын һалығыҙ. Сәскәнең киптерелгәне лә ярай. Бер аҙна төнәтергә. Һуңынан таждарҙы күҙ ҡабаҡтарына һалып, компресс эшләргә.

❖ Күҙ ҡабаҡтары шешеүен, һырҙарҙы ҡырғыстан үткәрелгән сей картуф яҡшы бөтөрә. Ошо уҡ маҡсатта сәй, петрушка, йүкә сәскәһе, күк сәскә, аҡ сәскә төнәтмәһен ҡулланырға була. Бының өсөн ярты балғалаҡ үләнде ярты стакан ҡайнар һыуҙа 20 минут төнәтергә, һөҙөргә, ике өлөшкә бүлергә. Бер өлөш төнәтмәне һыуытырға. Мамыҡты бер - һалҡын, бер йылы төнәтмәгә манып, күҙҙәргә һалырға. Иң аҙаҡтан һалҡын компресс менән тамамларға.

### Нервылар системаһы

❖ Нервылар ситемаһын нығытыу өсөн: 20 грамм бөтнөк (мята) япраҡтары, 25 грамм бесәй үләне тамыры (корень валериана), 50-әр грамм мәтрүшкә (душица), ҡандала үләне (донник), әнәлек сәскәләрен (цветки боярышника) ҡушып болғатығыҙ. 2 ҡалаҡ ошо ҡатнашмаға 0,5 литр ҡайнар һыу ҡойоғоҙ, төнәтегеҙ. Ашар алдынан сәй менән ҡушып ярты стакан эсегеҙ.

### Күҙҙәргә дауа

❖ Күреү һәләте түбәнәйеүен һиҙһәгеҙ, түбәндәгесә дауалай алаһығыҙ. 1 стакан кишер һутына 2 ҡалаҡ бал өҫтәп, көнөнә 3-4 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

❖ 1 стакан һыуға 1 ҡалаҡ һырғанаҡ емеше (облепиха) һалып, 3 минут ҡайнатырға, 1 сәғәт төнәтергә. Йылы көйөнсә иртәле-кисле ашарҙан алда яртышар стакан эсергә.

❖ 1 балғалаҡ цикорий үләне һәм тамырына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 30 минут төнәтергә. Иртәле-кисле ашарҙан алда яртышар стакан эсергә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

*✓ Стәрлебаш ағинәйҙәре бауырһаҡ байрамына әҙерләнгәндә был төбәктә генә уның утыҙ ике төрөн иҫәпләгән, уның тураһында ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр туплаған һәм килгән халыҡҡа файҙалы булһын өсөн китапсыҡ та баҫтырып сығарған.*



*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*

**Республиканың көньяҡ-көнсығыш райондарында тышлы кейеҙҙәр таралған. Туҡымаға ваҡ аппликация һәм ҡатмарлы ҡусҡар менән биҙәктәр һалынған. Туй бирнәһенә тышҡи биҙәлеше менән оҡшаш ике әйбер ингән: серге (сергетыш) менән ҡыҙыл түшәк.**

# БАШҠОРТ КЕЙЕҘЕ

Уларҙың тәүгеһе эйәр аҫтына һалыу өсөн тәғәйенләнә. Ул икенсеһенә ҡарағанда бәләкәйерәк, трапеция формаһында, орнаменттар менән биҙәлә һәм ҡайһы саҡта суғы була. Икенсеһе тура мөйөшлө, ситтәре орнаменттар менән биҙәлә, шулай уҡ урта өлөшөндә лә биҙәк була. Ҡыҙыл түшәкте ҡыҙҙың атының эйәре аша һалғандар. XX быуатта оҫтабикәләр башлыса түшәк эшләүгә күсә. Уларҙы йыш ҡына ат япмаһы итеп ҡулланғандар.



*Аппликация һәм сигеү менән биҙәлгән тышлы кейеҙ. Әбйәлил районы. 1958 й.*

1982 йылда Белорет районы Аҙнағол ауылында тамъян башҡорттарында осраған боронғо түшәктең үлсәме 112х70-95 см булған. Бер яғы оҙоная барған. Кейеҙ ҡыҙыл буҫтау менән тышланған һәм ҡуйы ҡыҙыл ҡайма менән ҡаймаланған, тар яғы суҡтар менән биҙәлгән. Ҡайманан бер аҙ урын ҡалдырып, 6 см киңлегендәге ҡара төҫтәге буй рам һымаҡ һалынған. Уның өҫтөнән һары-шәмәхә һәм алһыу-йәшел биҙәктәр үткән. Түшәктең мөйөштәрендә ваҡ ҡына тәкә мөгөҙө биҙәге ошо уҡ төҫтәр ҡулланып яһалған, өҫтәп зәңгәр төҫ кенә ҡулланылған.

Ошондай уҡ ҡыҙыл түшәк Әбйәлил районы Ташбулат ауылында осраған. Унда ла тамъяндар йәшәй. Түшәк XX быуаттың башында яһалған, рәт-рәт итеп ҡусҡар, мөгөҙ биҙәктәре һалынған. Сигеүҙә һары, йәшел, шәмәхә, ҡыҙыл, алһыу, аҡ йөн ҡулланылған. Орнамент ҡатмарлы сигеү техникаһы - ҡуш элмә менән башҡарылған.

Ҡара туҡыма буй менән уратып алынған ҡыҙыл төҫтәге нигеҙ боронғо туй түшәктәренә хас. Яңыраҡтарында, ҡыҙылдан тыш, һары, ҡара күк, хатта ҡара фон ҡуланылған, әммә мотлаҡ ҡыҙыл буй менән уратып алынған.

Рәссам Г. Мөхәмәтшин 1958 йылда экспедиция мәлендә Әбйәлил районының Ярлыҡап ауылында ике боронғо түшәкте һүрәткә төшөрөп ала. Улар икеһе лә ҡыҙыл буҫтау менән тышланған. Береһе ҡара бәрхәт туҡыма менән ҡаймаланған, икенсеһе - ҡара күк төҫтәге кизе-мамыҡ туҡыманан. Биҙәү өсөн Бөрйән һәм Әбйәлил райондарының таулы урындарында йәшәүсе тамъян һәм түңгәүер башҡорттарына хас аппликациялар ҡулланылған. Нигеҙҙә, ромб һәм өсмөйөштәрҙән торған биҙәктәр. Һүҙ барған түшәктәрҙең уртаһына тура мөйөш фигураһы һалынған. Ҡара таҫмалы түшәктә бының өсөн һары материал ҡулланылған. Ул үҙе ҡыҙыл һәм күк, ҡыҙыл һәм йәшел бәләкәй генә ромбтар менән биҙәлгән. Төҫтәр ике квадрат һайын ҡабатлана. Был да тап ошо төбәккә хас биҙәү ысулы.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*ЙОЛА ТОТҠАН - ЯҘЛЫҠМАҪ!*

# ӨҪТӘЛДӘРЕБЕҘҘӘ...

## милли ризыҡтарыбыҙ булһын

**Борон ҡатын-ҡыҙҙың уңғанлығын нәҙек итеп һалма ҡырҡа белеү оҫталығына ҡарап билдәләгәндәр, тип һөйләй торғайны ололар. Ә бына Стәрлебаш районында уңған хужабикәләрҙе бешергән бауырһағына ҡарап танығанар икән. Ошо көндәрҙә райондың "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы, мәҙәниәт бүлеге тарафынан Башҡортостан Республикаһының 100 йыллығына һәм Бөтә донъя Фольклориадаһына бағышлап үткәргән фестиваль-конкурста беҙ шуға шаһит булдыҡ һәм уңған ҡатын-ҡыҙҙарҙың Башҡортостандың төрлө төбәктәренән саҡырылған ҡунаҡтарға байрам ашы - бауырһаҡ бешереү серҙәрен өйрәтеүен тамаша ҡылдыҡ.**



Башҡорт халҡының борондан килгән ҡунаҡ ҡаршылау йолаһына ярашлы, бауырһаҡ-ҡымыҙ ауыҙ иттереп, йыр-таҡмаҡ менән сәләмләгәндән һуң, Стәрлебаш район хакимиәте башлығы Фәнүр Туҡтаров, ауыл хакимиәттәре башлыҡтары һәм Стәрлетамаҡ, Ишембай, Мәләүез ҡалаларынан, Көйөргәҙе, Күгәрсен, Федоровка райондарынан килгән ҡунаҡтар алдында күргәҙмәгә юл асылды. Башҡорт милли аш-һыуҙарының бөтәһе лә, бауырһаҡтың ғына ла әллә күпме төрө урын алғайны күргәҙмәлә. Баһалама комиссияһы ағзалары тәүгеләрҙән булып Ҡабыҡҡыуыш ауылында ниндәй тәм-томдар әҙерләнеүен асыҡланы һәм балы телдә иреп торған бауырһаҡты, өҫтәл күрке булып торған сәскәне һәм ҡош телен оҫта хужабикә Айгөл Собханғолова бешереүен белде. Ә инде барлай китһәң, өҫтәлдә ҡомалаҡлы икмәк, май майы, бал, сәмбүсә, ҡоймаҡ, ҡыҫтыбый, эремсек, балан ләүәше, бәрәңге бәрәмәсе, еләк ҡайнатмаһы, ҡыҙыл эремсек, ваҡ бәлеш, манты, ҡорот, ҙур бәлеш, ҡаҙылыҡ, емешеләк һәм хатта ҡымыҙы ла, самауырлы сәйе лә бар ине. "Стәрлебаш районына 17 йәштә генә килен булып төштөм, бында бик уңған халыҡ йәшәй, унар һыйыр аҫрайҙар, ризыҡтары мул. Тыуған районым Ҡырмыҫҡалыла итте ваҡлап турап ҡына ултыртһалар, бында өлөшләп бирәләр. Һуғым аштарында хатта бер ҡаҙҙы дүрт өлөшкә генә бүлеп, баш-тәпәйен дә әҙерләп ултырталар", - тип һөйләне һүҙ араһында Айгөл Собханғолова. Ҡабыҡҡыуыш ауылы ҡатын-ҡыҙҙары бешергән ашһыуҙарҙың үҙенсәлекле атамаһы ла онотола яҙғандарҙы хәтергә төшөрҙө: мәҫәлән, Раушания Һөйәрембәтова бешергән сәмбүсә, эсәк-ҡарынды турағыс аша үткәреп эшләнгән был бәлеште бөйөрөк тип тә атайҙар. Ҡабыҡҡыуыш ағинәйе Дилбәр Собханғолова иһә балтырған ашын бешереү сере менән уртаҡлашты: "Стәрлебаштар балтырғанды йомортҡа ҡушып бутап бешерә, ә беҙҙең Бөрйән яғында үләндең үҙен генә бешерәләр. Ҡабыҡҡыуыштар, балтырған һәм кесерткән ашын өс тапҡыр бешереп ашаһаң, йыллыҡ дауа алаһың, тиҙәр. Был йоланы онотҡаныбыҙ юҡ..." Ҡабыҡҡыуышта эре малды күп тотҡан ғаиләләрҙең Салауат ҡалаһы баҙарын һөт, ит ризыҡтары менән тәьмин итеүен дә белдек.

"Өләсәйҙең ҡунаҡ ашы - табын күрке баллы бауырһаҡ!" тигән яҙыу эленгән өҫтәлгә Шәкәр ауылы ағинәйҙәре тауҙай өйөп "Витаминлы бауырһаҡ" ҡуйған, сәк-сәк, һары сәскәле, йәшел япраҡлы ҡош теле, йәйҙе хәтерләткән муйыл һәм еләк тубы теҙгән. Был ауыл ҡатын-ҡыҙҙарының "Күндерәккәй" халыҡ фольклор ансамбле республиканы ғына түгел, бөтә Рәсәйҙе лә йырбейеүҙәре менән таң ҡалдыра, был юлы уларҙың байрам өҫтәле лә хайран итте. Артабан ҡунаҡтар Баҡый ауылы ҡатын-ҡыҙҙары ҡуйған өҫтәлдә Зилиә Яппарованың сәтәкәй бармаҡтай нәҙек итеп әҙерләгән сәк-сәген, бәрәңге бәрәмәсен баһаланы, Мәксүт ауылынан Тәүзиха Дәүләтшинаның: "Эре бауырһаҡ бешереү өсөн йомортҡаны туңдыраһың, шунан иретеп алып, яҡшы итеп туҡыйһың да, йомшаҡ ҡына итеп ҡамыр баҫып, 20 минутҡа һыуыҡҡысҡа һалып тораһың. Шунан табаға көнбағыш майы ҡойоп, саҡ ҡына ҡаҙ майы ҡушып ҡыҙҙырып алам", - тип, эре бауырһаҡ бешереү серҙәре менән бүлешеүен ҡыҙығып тыңланы. Иҫке Ҡалҡаш ауылынан Маһинур Хөбөтдинованы тыңлайбыҙ. Ул тәүге тапҡыр бауырһаҡты ҡыҙын кейәүгә биргәндә бешереп ҡараған. "Оҫта бауырһаҡсыны саҡырып, бауырһағы оҡшамағас, төнө буйы туйға үҙем бешереп сығыуыма ун алты йыл хәҙер, - ти Маһинур Муса ҡыҙы. - Бауырһаҡ бешереү оҙаҡ ваҡыт талап итә, бер һалған ҡамырҙы ун биш минут буйы болғатып, эргәһендә баҫып торорға кәрәк. Түҙемле, өлгөр һәм егәрле хужабикәләр генә бешерә ала уны". Фестиваль-конкурс һөҙөмтәләре буйынса унда ҡатнашыусыларҙың барыһы ла төрлө номинацияларҙа баһаланды. Стәрлебаш ағинәйҙәре бауырһаҡ байрамына әҙерләнгәндә был төбәктә генә уның утыҙ ике төрөн иҫәплләгән, уның тураһында шиғырҙар, ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр туплаған һәм килгән халыҡҡа файҙалы булһын өсөн китапсыҡ та баҫтырып сығарған. "Байрамға етди әҙерләндек, бауырһаҡ тиҙ генә телдә иреп юҡ булһа ла эше шул тиклем ваҡытты ала, - ти райондың "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Миңлехәнә Баһауетдинова. - Туй йолаһында тулыһынса бауырһаҡтың ҡулланылышы сағыла, шуға, был фестивалгә бөтә ауылдарҙың ағинәйҙәре, мәктәп һәм балалар баҡсаһы, район китапханаһы, мәҙәниәт йорто, балаларҙың ижад йорто менән күмәкләшеп әҙерләндек".

Әйткәндәй, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзаһы Рәйсә Күзбәкова, республика "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Гөлфиә Янбаева, билдәле журналист һәм драматург Сәрүәр Сурина, Өфө районының Шамонино ағинәйҙәре етәксеһе Рәүфә Вәлиева, "Ашҡаҙар" радиоһы журналисы Фәнүзә Баһауетдинова ла Стәрлебаш ағинәйҙәрененң эшен юғары баһаланы. Иң мөһиме, бөтәһе лә ағинәйҙәрҙең көндәлек ваҡ мәшәҡәттәр, донъя һәм тәрбиә мәсьәләләрен хәл иткән арала ошондай күркәм байрамдар ойошторорға өлгөрөүенә һоҡланыуын белдерҙе. Ағинәйҙәрҙең матур йолаһы буйынса, киләһе оло йыйынды үткәреү эстафетаһы Федоровка районы ағинәйҙәренә тапшырылды һәм улар йәмле йәй айҙарында бал байрамына саҡырып ҡайтты.



**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бынан бер нисә йыл элек кенә битараф булмаған ҡатын-ҡыҙҙарҙы бергә туплаған республика "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы гөрләтеп эш башлап ебәргәйне, бөгөн ул оло бер тулҡынға әүерелде. Үҙгәртеп ҡороу йылдарын, көрсөктәрҙе, эшһеҙлекте, баҙар иҡтисадын һәм башҡа тормош һынауҙарын иңгә-иң күмәкләп күтәрергә өйрәнгән ауыл кешеләре өсөн был эшмәкәрлек яңы һулыш өҫтәп ебәрҙе. Байрам сараһы бер тапҡыр була ла үтә, ә ағинәйҙәрҙең көндәлек йәмәғәт эшендәге энтузиазмы бөтәбеҙҙең дә йәшәү рәүешенә әйләнер, тип ышанғы килә.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ХӘТЕРКИТАП

# МИЛЛИ ХАРАКТЕРЛЫ АКТРИСА

**"Ҡабаттан йәнләнгән фотоһүрәттәр" проектының маҡсаты - кинорежиссер Булат Йосоповтың "Беренсе Республика" тарихи нәфис фильмы геройҙары менән таныштырыу. Фотоларҙың тәүгеһендә - тарихи шәхес үҙе булһа, икенсеһен фильмдың костюмдар буйынса рәссамы Әлиә Байрамғолова кино төшөрөү майҙансығында яһаны. Сираттағы геройыбыҙҙы тамашасы Мәжит Ғафуриҙың "Ҡара йөҙҙәр" спектаклендәге Ғәлимә роле өсөн айырыуса үҙ итә торған булған.**



*Тәлиға Бикташева. Актриса Рәзифә Динмөхәмәтова.*

**Тәлиға Миңлевәли ҡыҙы БИКТАШЕВА** (актриса Рәзифә Динмөхәмәтова уйнай) - совет актрисаһы. Бәләкәй сағынан йырларға, бейергә яратҡан ҡыҙҙың урта мәктәпте тамамлағас та актриса һөнәрен үҙләштерергә Өфөгә юлланыуына бер кем дә аптырамағандыр, моғайын. Ҡыҙылға буйлап ҡалын киндерҙән тегелгән берҙән-бер күлдәген кейеп, бәләкәй генә төйөнсөк тотоп, баш ҡалаға килгәндә Тәлиғаға 16 йәш була. 1932 йылда Башҡорт сәнғәт техникумының танылыу яулаған режиссер һәм актеры Вәлиулла Мортазин менән Мәкәрим Мәһәҙиев класын тамамлай. Студент сағында уҡ Мирхәйҙәр Фәйзиҙең Башҡорт драма театры сәхнәһендә ҡуйылған "Ғәлиәбаныу" спектаклендә төп ролде башҡара. Остаздары Таңһылыу Рәшитова менән Бәҙәр Йосопова яҙамында йәш актриса Мөхәмәтша Буранғоловтың "Башҡорт туйы", Дауыт Юлтыйҙың "Ҡарағол", Хәбибулла Ибраһимовтың "Башмағым" спектаклдәрендә уйнай башлай. Хисле булыуы, геройының булмышын тулыһынса ҡабул итеү һәләте, актерлыҡ оҫталығы уға классик репертуар спектаклдәрендә лә, башҡорт авторҙары әҫәрҙәрендә лә берҙәй уңышлы уйнарға мөмкинлек бирә. Билдәле бейеүсе Хашим Мостаев ул йылдар тураһында былай тип хәтерләй: "Спектаклдәрҙә йырлы, бейеүле сәхнәләр күп була торғайны. Театр артистары Зәйтүнә Бикбулатова, Тәлиға Бикташева, Рәғиҙә Янбулатованың тауыштары бигерәк моңло ине. Тамашасы театрға уларҙың йырлауын тыңларға йөрөй торғайны. Спектаклдәрҙә яңғыраған күп йырҙарҙы йырлап та йөрөнөләр...".

**Гөлнара ЯРУЛЛИНА,**
**тарих фәндәре кандидаты,**
**проект авторы.**

ҠЫУАНЫС БИТ!



**"Юлдаш" мәғлүмәт һәм йыр-моң каналы "Тыуған илкәйемде данлайым!" тигән аудиокитаптың исем туйын билдәләне. Проект етәксеһе Тәнзилә Үлмәсбаева әйтеүенсә, был шиғри альманах Башҡортостан Башлығының республиканың дәүләт телдәре һәм уның халыҡтарының туған телдәрен һаҡлауға һәм үҫтереүгә йүнәлтелгән Грант аҡсаһына сығарылған.**

# ШУНДАЙ КИТАБЫБЫҘ БАР!

Башҡортостан дәүләт телерадиокомпанияһының аудиояҙмалар фондында фиҙаҡәр радио хеҙмәткәрҙәре бөртөкләп йыйған төрлө заман тапшырыуҙары, әҫәрҙәр, йырҙар, билдәле шәхестәрҙең фекерҙәре, әҙиптәрҙең сығышы, сәнғәт әһелдәренең тауышы һаҡлана. Шул хазинаның бер өлөшө - Башҡортостандың талантлы 100 шағирының тауышы "Тыуған илкәйемде данлайым!" тигән ошо йыйынтыҡҡа тупланған. Бында башҡорт шағирҙарының 1956 йылдан алып 2018 йылға тиклем яҙҙырылған сығыштары индерелгән, китаптың һәр битендә авторҙың фотоһүрәте һәм ҡыҫҡаса биографияһы бирелгән. Иң боронғо аудиояҙма 1956 йылғы, унда Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Рәшит Ниғмәти үҙ шиғырын һөйләй. Рәми Ғарипов, Зәйнәб Биишева, Яҡуп Ҡолмой, Мостай Кәрим, Әнғәм Атнабаев, Ғәзим Шафиҡов, Хәким Ғиләжев, Назар Нәжми кеүек башҡорт әҙәбиәтендә ҙур эҙ ҡалдырған шәхестәрҙең тере тауышын ишетергә мөмкин. Уларҙың юлын дауам итеүсе замандаш шағирҙарҙың да ижадына урын табылған өс сәғәтлек аудиокитапта.



Проект авторҙары аудиокитаптың төп ҡиммәте Башҡортостан дәүләт телерадиокомпанияһының архивында ғына һаҡланған иҫтәлекле яҙмаларҙы киң йәмәғәтселеккә сығарыуҙа тип иҫәпләй. Бынан бигерәк йәш быуында илһөйәрлек, телһөйәрлек тойғоһо тәрбиәләү һәм башҡорт әҙәбиәтенә ҡыҙыҡһыныу уятыу йәһәтенән дә был хеҙмәттең әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ. "Был баҫма Башҡортостандың 100 йыллығына арнала, шуға күрә күп осраҡта шиғырҙарҙың республикаға, туған телгә, тыуған илгә, халҡыбыҙға арналғанын йыйҙыҡ. Алтын һандыҡ һымаҡ фонд бар, унда инеп китһәң, береһенән береһе ҡиммәтлерәк яҙмалар менән осрашаһың, шуларҙы халыҡҡа еткермәү енәйәткә тиң тип һанайым мин. Улар барыһы ла халыҡ өсөн тип эшләнгән һәм киләсәктә әҙәби әҫәрҙәргә туплап сығарыу эшен дә планлаштырабыҙ. Был аудиокитапты бушлай таратабыҙ һәм беҙгә шылтыратып алырҙар тип көтәбеҙ, сөнки бик мәғлүмәтле һәм файҙалы әсбап килеп сыҡты", - ти проект етәксеһе Тәнзилә Үлмәсбаева.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**"Тыуған илкәйемде данлайым!" шиғри йыйынтығының исем туйында ҡатнашып, тәүгеләрҙән булып уны ҡулға алған әҙиптәр ҙә, вуз уҡытыусылары ла бик юғары баһа ҡуйҙы. Тегә заман һәм хәҙерге заман әҙиптәренең күңел ҡылдарын сиртерлек, шиғри һүҙҙең ҡөҙрәтен, моңон аңлатырлыҡ сығыштарын туплаған шәп аудиокитабы бар хәҙер халҡыбыҙҙың!**

**Ғәлиә ШӘМСЕТДИНОВА.**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ



*Әкрәм БЕЙЕШ*

# БАШҠОРТ АВТОНОМИЯҺЫ ӨСӨН КӨРӘШ БАШЫНДА

Шундай көсөргәнешле мәлдә, 1918 йылдың 4 апрелендә, атаман Дутовтың Ырымбурға сапҡын яһаған сағында, Башҡорт Мәркәз шураһы менән Башҡорт хөкүмәтенең ағзалары төрмәнән сыҡҡан. Төрмәнән ҡотолған хөкүмәт ағзалары Советтар ҡулы аҫтындағы ерҙән ҡасып, Силәбегә йыйылған. Силәбе ул ваҡытта совет власына ҡаршы фетнә күтәргән плендағы чех һалдаттарының ҡулында булған.

1918 йылдың яҙ һәм йәй көндәрендә Башҡортостан ерендә ҡыҙылдар менән аҡтар һуғышы ҡыҙып киткән. Башҡортостан аша үткән фронт башҡорт халҡының ҡазаһын йөҙләтә көсәйтеп ебәргән. Большевиктар ҡылған аяуһыҙ террор өстөнә уларҙың сигенгән ғәскәрҙәре ҡоторонған. Большевиктар артында тотош таланған, ҡанға батҡан ауылдар тороп ҡалған.

Силәбелә урынлашҡан Башҡорт хөкүмәте яйлап эш башлаған. Әлбиттә, булған хәлдәрҙән һуң Башҡорт хөкүмәте, бөтә башҡорт халҡы кеүек үк, совет власына элеккесә ҡарай алмаған, ул уны ысын дошман итеп күргән. Большевиктарға ҡаршы көрәшкә саҡырып, Башҡорт хөкүмәте: "Әгәр беҙ, башҡорттар, ...уларҙы Урал буйынан ҡыумаһаҡ, ер хоҡуғын, автономия хоҡуғын тотош юғалтабыҙ", - тип яҙған. Большевиктарҙың хөкөмөн татыған башҡорттарҙы был һүҙҙәрҙең дөрөҫлөгөнә ышандырып тороу кәрәкмәгән, улар бөтә йөрәге менән үҙҙәренең яңынан тергән хөкүмәтенә тартылған. Башҡорттар большевиктарға ҡаршы көрәшергә ныҡ ҡарар иткән, ләкин большевиктарға ҡаршы көрәшеү башҡа контрреволюцион төркөмдәр өсөн төп маҡсат булғанда, башҡорттар өсөн төп маҡсат булмаған, ә берҙән-бер маҡсатҡа - халыҡтың тереклеген һәм үҙаллы үҫешен тәьмин итерлек милли автономияға өлгәшер сара ғына булып торған. Яңынан эш башлағас та, Башҡорт хөкүмәте шул маҡсатты ғәмәлгә атҡарыу хаҡында хәстәрлек күргән.

Башҡорт хөкүмәте иң элек Силәбелә власть тотҡан чехтар менән башҡорт автономияһы тураһында килешеү төҙөгән. Автономияны хуплау менән бергә чехтар килешеү ҡағыҙына, автономияға һуңғы санкцияны Бөтә Россия учредитель йыйылышы бирә, тип иҫкәрмә индергән. 1913 йылдың июнендә, Бөтә Россия учредитель йыйылыш комитеты (Комуч) йәки, икенсе төрлә әйткәндә, Һамар хөкүмәте төҙөлгәс тә, башҡорттар уның менән һөйләшкән һәм Комуч Башҡортостан автономияһын ҡабул иткән. Ләкин был ғына әле етмәгән, сөнки Башҡортостандың ҙур өлөшө 1918 йылдың ғинуарында уҡ Томск ҡалаһында ойошторолған Ваҡытлы Себер хөкүмәтенең ҡул аҫтында булған. Ул хөкүмәт менән башҡорттар 1918 йылдың июлендә килешеү яһаған. Себер хөкүмәте лә башҡорт автономияһын таныған. Хәҙер Башҡорт хөкүмәте алдына милли автономияны ысынлап ғәмәлгә ашырыу, Башҡортостан ерендә үҙ хөкөмөн урынлаштырыу һәм уны ышаныслы һаҡ менән тәьмин итеү мәсьәләһе килеп баҫҡан. Бының өсөн көслә генә Башҡорт ғәскәре ойоштороу кәрәк булған.

**(Дауамы бар).**

***✓ Бала тәрбиәләү яуаплылығы ла әсәй иңендәлер, тип уйлайым һәм бөгөнгө "атайҙар тейеш" тигән оранға ҡушылмайым. Атай кеше аҡса табыу менән мәшғүл, уның башҡа донъяуи бурыстары ла аҙ түгел.***

# ҠАТЫН-ҠЫҘҘЫҢ

**Ҡатын-ҡыҙҙың асылы нимәлә? Сибәрлегендәме? Шәплегендәме? Ихласлығындамы? Әллә шуларҙың һәм тағы ла бихисап сифаттарҙың берләшеүендәме? Әйҙәгеҙ, беҙ быларҙы ҡатын-ҡыҙҙарҙың үҙҙәре менән бергә асыҡлайыҡ. Шулай итеп, Халыҡ-ара Ҡатын-ҡыҙҙар байрамы уңайынан саҡырылған ҡунаҡтарыбыҙ - бизнес-ледиҙар Әлфинур Ғиззәтуллина, Гөлшат Хәкимова һәм тарих фәндәре кандидаты Гөлсәсәк Бүләкова менән әңгәмәләшәбеҙ.**

**Хөрмәтле ҡатын-ҡыҙҙар, хәҙер һеҙгә "Үҙ тормошоғоҙ хаҡында һөйләгеҙ әле" тиһәм, һүҙҙе нимәнән башлар инегеҙ?**

**Гөлшат:** Мин, моғайын, балаларым, ғаиләм хаҡында һөйләр инем...

**Әлфинур:** Эшем тураһында һөйләр имемме икән...

**Гөлсәсәк:** Минең ҡарашым, бәлки, йәштәрсәрәктер - үҙемдән башлар инем.

**Был һорауҙы юҡҡа ғына бирмәнем. Психологтар ҡатын-ҡыҙҙың йәшен һәм шул йәшенә ярашлы донъяны ҡабул итеүен белеү өсөн ошо һорауҙы биреүсән. Һәм яуаптар ҙа һеҙҙекенә ярашлы була: 20-нән 30-ға тиклемге ҡатын-ҡыҙ үҙе хаҡында һөйләй, 30-ҙан 40-ҡа тиклемгеләр балаларын алға ҡуя, ә инде 45-тән юғары йәштәгеләргә эше тураһында һөйләү ҡыҙығыраҡ кеүек тойола. Ярай, быныһы шундай һынамыш булды. Ә артабан, әйҙә, гәзит уҡыусыларҙы һеҙҙең менән таныштырайыҡ. Әлфинур ханым, белеүемсә, һеҙ мәктәптәге хеҙмәт менән бер рәттән, шәхси эшҡыуарлыҡ менән дә шөғөлләнәһегеҙ. Әйтегеҙ әле, уҡытыусы көндөң ниндәй ваҡытында икенсе эш менән мәшғүл була ала?**

**Әлфинур:** Минең беренсе һәм төп һөнәрем - уҡытыусы. Баш ҡаланың 14-се мәктәбендә егерме биш йыл башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса белем бирәм. Һәм инде ун йыллап туристик агентлыҡтың етәксеһе булып та торам. Һөнәрҙәремдең икеһен дә яратам. Әммә мәктәптә генә хеҙмәт итеү, ундағы артыҡ ҡалыплашҡан йәшәйеш мине тулыһынса ҡәнәғәтләндермәне һәм мин үҙемде икенсе өлкәлә лә һынап ҡарарға булдым. Бөтөнләй ят, таныш булмаған өлкәне өйрәнгем, яңы юҫыҡта үҫешкем, башҡа контингент кешеләре менән аралашҡым килде. Ваҡытты дөрөҫ бүлә белгәндә һәр нәмәгә лә өлгөрөргә, теләк һәм тырышлыҡ булғанда, нимәне лә килтереп сығарырға була икән ул. Мин дә бына ошоно иҫбатланым. Башта аҙыраҡ йүгермәләргә тура килһә лә, хәҙер инде агентлыҡта менеджерҙарым бар. Шулай итеп, көндөң яртыһында мин уҡытыусы, яртыһында - эшҡыуар.

**Гөлсәсәк:** Мин - тарихсы, махсус рәүештә этнографияны өйрәнеүсе белгес. Был өлкә менән бала саҡтан танышмын. Өләсәйем Вәсилә Садиҡова башҡорт милли кейемдәре буйынса үҙе бер ҙур белгес кимәлендәге ағинәй. Ирем дә тарихсы. Шунлыҡтан, был өлкәне беҙ өйрәнәбеҙ, тип кенә әйтеү аҙ, ә был беҙҙең тормош, йәшәйеш, тип әйтергә була. Һәм тарихты ла мин фәнни дәрәжәләргә өлгәшеү мөмкинлеге генә итеп ҡарамайым, этнография буйынса туҡтауһыҙ тикшеренеү, халыҡҡа аңлайышлы мәғлүмәттәр биреү йүнәлешендә эшләргә тырышам. Һәм был мәғлүмәттәрҙең тарихи дөрөҫлөккә тап килеүе төп шарт булып тора. Мәҫәлән, күптән түгел ҡалабыҙҙың бер билдәле музейында булырға тура килде һәм унда милли кейемдәр буйынса үтә лә наҡыҫ, хаталы мәғлүмәттәрҙе тыңлап, эс бошто. Музей хеҙмәткәре башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары биҙәүестәренең нимәһе селтәр, ҡайһыһы яға йәки хәситә икәнен дә айырмай ине. Был тәңгәлдә беҙҙә башҡарылаһы эштәр күп әле.

**Гөлшат:** Минең уҡыған һөнәрем үк туристик бизнес буйынса ине. Башта агентлыҡтарҙа хеҙмәткәр булып йөрөнөм, өйрәндем, тәжрибә тупланым. Унан ирем менән бергәләп үҙебеҙ йөрьәт иттек. Эш башлаған йылдарҙа, балалар бөтөнләй бәләкәй саҡта, әлбиттә, ауырғараҡ тура килде. Әммә беребеҙ төшөнкөлөккә бирелгәндә - икенсебеҙ күтәрмәләп, беребеҙ арығанда - икенсебеҙ дәртләндереп, эштәрҙе яйға һалып алдыҡ.

Был шөғөл мине шундай мөкиббән итте. Ял итергә теләүселәрҙе йәлеп итеү, уларҙа ялға барыу теләге уятыу, ҡыҙыҡһындырыу өсөн ошо илдәр хаҡында мәғлүмәтле булыу, сит илдәр, халыҡтар йолаларын, байрамдарын, йәшәү рәүешен, ил-ара мөнәсәбәттәрҙе, сәйәсәтте һәм башҡаларҙы даими өйрәнеп барыу үҙемде лә күпкә үҫтерҙе. Мин хәҙер теләһә ниндәй ил һәм халыҡтар хаҡында әллә күпме мәғлүмәт бирә алырлыҡ белгес булып киткәнмендер, тиһәм дә арттырыу булмаҫ. Ял итеп йөрөүсе, ялдан ҡайтыусы клиенттар менән дә бәйләнештә тороу, уларҙың фекеренә, хистойғоларына ҡолаҡ һалыу, теләктәрен ишетеү ҙә беҙҙең төп бурыс. Көндөң һәм төндөң теләһә ниндәй ваҡытында ла мөрәжәғәт итеүселәрҙең һәр береһенә ваҡыт бүлергә, һорауҙарын ҡәнәғәтләндерергә кәрәк. Шунлыҡтан минең айырым эш ваҡытым йәки эштән тыш ваҡытым юҡ, ҡайҙа ла эш процесындамын.

**Ғөмүмән, туристик бизнестың киләсәге бармы? Интернет бәйләнеше, технологик уңайлыҡтар ҡыҫырыҡламаймы? Халыҡты ял итергә йәлеп итеп буламы? Ял итеү мәҙәниәте бармы ул беҙҙә?**

**Әлфинур:** Ошо өлкә менән тығыҙ аралашҡас, күҙәтеүҙәрем дә бар. Һуңғы биш-алты йылда ял итеүселәр һаны ҡырҡа артты. Мин бында үҙебеҙҙең милләт халҡын, бигерәк тә ауылдарҙа, райондарҙа йәшәүселәрҙе күҙҙә тотам. Элегерәк ҡайҙалыр сит илгә ялға барып ҡайтҡандарға "мещандар" кеүегерәк итеп ҡараһалар, хәҙер уртаса ғына йәшәгәндәр ҙә ситкә сығып ял итеп килергә тырыша.

**Гөлшат:** Ял итә белеү ул үҙеңдә ярата белеү кеүек үк психологик тороштор, тип уйлайым. Быға ла өйрәнергә кәрәк. Мәҫәлән, беҙҙә йыл буйына көнөтөнө эшләп, отпускыла иһә баш ҡалҡытмай йә баҡсала, йә башҡа ерҙә тир түгеү ғәҙәти хәл. Хатта ял көндәрендә лә әллә күпме эшләп өлгөрөргә тырышабыҙ, ялыбыҙҙан тағы ла арыңҡырап, йонсоңҡорап сығабыҙ. Шулай түгелме ни? Бына ошоларҙың барыһынан арынып, онотоп һәм онотолоп йылына бер тапҡыр ял итеп алыу мотлаҡ. Бөтөнләй икенсе донъя, икенсе мөхит һәм климатлы ерҙәргә барып ҡайтыу бигерәк тә шәп. Шулай иткәндәр был был ғәҙәтен ҡуймай аҙаҡтан да. Кеше бит сәйәхәттән мотлаҡ ниндәйҙер эске үҙгәреш кисереп, ниндәйҙер яңы уйҙар, яңы идеялар менән ҡайта. Тормошҡа ҡараштары ла яңыра һәм күптәр ялдан һуң төрлө уңыштарға ла өлгәшеп ҡуя.

**Хөрмәтле ҡатын-ҡыҙҙар, һеҙ барығыҙ ҙа эшкә бирелгән, хеҙмәт өлкәһендә ниндәйҙер дәрәжәләргә өлгәшкән ханымдарһығыҙ. Нисек уйлайһығыҙ, ғаиләгеҙгә етерлек кимәлдә иғтибар бүлә алаһығыҙмы?**

**Гөлшат:** Был минең иң ауыртҡан урын инде. Үҙем дә ошо хаҡта йыш уйлайым. Балаларым ун һәм дүрт йәшлек кенәләр, иң иғтибарға мохтаж саҡтары һәм мин, ысынлап та, уларға ваҡытты аҙ бирәмдер тип әсенәм. Ғәҙәти ял көндәребеҙ ҙә, балаларға тип кенә атап бүлгән мәлебеҙ ҙә юҡ. Ҡайһы ваҡыт, туҡтале, балаларым менән генә булып алайым әле, тип, өйҙә ҡалғаным да булды, әммә икеөс көндән был ниәтем үҙгәрҙе һәм мин ҡабаттан донъя яуларға ынтылдым. Шулай ҙа йылына бер нисә тапҡыр ғаилә менән аҙналап сәйәхәттә йөрөп килергә тырышабыҙ. Әммә... Беҙ, мәҫәлән, үҙебеҙ ҙә шулай үҫтек. Ата-әсәйҙәр көнө буйы эштә, беҙ әле бәләкәй генә көйөнсә үҙебеҙҙе үҙебеҙ ҡарай инек. Ололарҙың беҙгә махсус ваҡыт бүлә алмауы арҡаһында барлыҡҡа килгән бер проблеманы ла күрмәйем. Киреһенсә, бешеккәнерәк, үткенерәк булып үҫтек кеүек. Беҙҙең был тәңгәлдә алыштырғыһыҙ ярҙамсыларыбыҙ өләсәй-олатайҙарыбыҙ инде. Уңайы сыҡҡан һайын уларға мөрәжәғәт итәбеҙ.

**Әлфинур:** Мин инде үҫкән егет һәм ҡыҙҙарҙың әсәһемен. Бер ваҡытта өйҙән сығып китәбеҙ, шулай уҡ бер ваҡытта ҡайтып инәбеҙ. Ниндәйҙер иғтибарға мохтаж булып ултырыу түгел, уларҙың үҙҙәренең дә ваҡыты юҡ. Әлбиттә, балалар бәләкәйерәк саҡта бәләкәстәремә етерлек иғтибар күрһәтә алмайымдыр кеүек ине. Хәҙер аңлайым, балаларҙы кемдеңдер иғтибарына мохтаж булмаҫлыҡ итеп, шулай уҡ эшкә, төрлө түңәрәктәргә, шөғөлдәргә күнектереп тәрбиәләргә кәрәк икән. Һәм улар һеҙҙең - ата-әсәнең дә эш менән мәшғүл икәнен күреп тора бит.

Балаларым бәләкәйҙән үҙаллы булды. Бешмәгән икән, үҙҙәре бешереп ашаны, беҙ ҡайтҡансы дәрестәрен эшләп, өй мәшәҡәттәрен тамамлап ҡуялар ине. Асылда, уҡыған, аралашҡан мөхиттәре лә матур булды. Был да бик мөһим фактор бит. Икеһе лә ҡалабыҙҙың 20-се башҡорт гимназияһында белем алды, үҙ милләтебеҙҙең, яҡшы кешеләрҙең тәрбиәле балалары менән аралашып, дуҫлашып үҫтеләр. Хәҙер ҙә мин әсәй булараҡ балаларымды "шулай бул, былай бул" тип өйрәтмәйем, шәхси тормоштарына артыҡ тығылып бармайым, әммә ситтән генә контролдә тотам. Улар әле лә үҙаллылыҡҡа ынтылалар. Тормоштарындағы мөһим хәлваҡиғаларҙы үҙҙәренсә хәл итергә тырышалар. Әлбиттә, әсәй хоҡуғында фекеремде һәм кәңәшемде әйтәм, тик береһен дә тотоп һындырмайым. Ниндәй хәлдә лә, уларға ярҙам итерҙәй, бик булмаһа, ҡосаҡлап һөйөрҙәй әсәйҙәре барлығын белдереп торам. Иң мөһиме ошолар, минеңсә.

**Гөлсәсәк:** Улыма биш кенә йәш булһа ла, мине тотошлайы менән әүрәтә ала. Барлыҡ эштәремде ташлап, уның менән уйнап алам, ултырып, ололарса һөйләшеп тә алабыҙ. Бөгөн беҙгә, йәштәргә, бала тәрбиәләү өсөн әҙәбиәт тә, башҡа ярҙамдар ҙа етерлек. Әммә барыбер ҙә бала ата-әсәнең үҙенә һәм үҙ-ара-мөнәсәбәтен күреп-тойоп үҫергә тейеш. Шуға ла үҙ ҡылыҡтарыбыҙ өлгөһөндә тәрбиәләргә тырышабыҙ улымды. Мәҫәлән, минең атаһына мөнәсәбәтемде, уның миңә нисек өндәшеүен йәки беҙҙең ҡартәсәһенә булған ҡарашыбыҙҙы ул аңына һеңдереп йөрөй.

**Һеҙ ғаиләлә иң мөһим кешеме? Һеҙҙең кеүек булдыҡлы, эшлекле ҡатындар янында ир-егеткә нисегерәк икән?**

**Гөлшат:** Һәр хәлдә, мин иремә конкурент түгел. Ул уйлап, самалап, ижади эшләй, ижади фекерләй торған кеше. Ә мин икенсерәк. Ниндәй эштә лә үҙемдең ҡаңғыра биреп китеүемде беләм һәм уның тос ҡына һүҙен, кәңәшен көтәм. Ғаиләлә өс малай үҫкәс, йыш ҡына "Һин әйт, һине тыңлайҙар", тип, атайҙарына һылтанып ҡуям. Ә мөһимлеккә килгәндә, әлбиттә, мин - мөһим. Әсәй бөтә ғаиләләрҙә лә шулайҙыр инде. Минең кәйефем булмаһа, был өйҙәгеләрҙең барыһына ла һиҙелә. Барыһы ла күңелемде күтәрергә тырыша башлай. Өйҙә булмайым икән, өсөһө лә көйһөҙләнә. Үҙемдең шул өс йән өсөн үтә лә ҡәҙерле, кәрәкле икәнемде беләм, тоям һәм ошо миңә көс бирә лә.

**Әлфинур:** Халыҡ араһында "руль миндә" тигән шаян һүҙ бар бит. Беҙҙең ғаиләлә лә яҡшы мәғәнәлә "руль миндә". Атайыбыҙ ижад кешеһе, уға тыныслыҡ та, эш шарттары ла кәрәк, мәшәҡәттәре лә күп. Мин уны көнкүрештең ваҡ мәсьәләләре кимәленә төшөрмәй, юҡ-бар менән борсомай өйрәткәнмен. Бала тәрбиәләү яуаплылығы ла әсәй иңендәлер, тип уйлайым һәм бөгөнгө "атайҙар тейеш" тигән оранға ҡушылмайым. Атай кеше аҡса табыу менән мәшғүл, уның башҡа донъяуи бурыстары ла аҙ түгел. Һәм ул ир кеше, нимәгә уны йүргәк-ҡашығаяҡ менән тышарға? Ниндәйҙер етди һорауҙарҙы ғына уртаға һалып хәл итәм, ә былай барыһын да үҙаллы эшләйем. Ул да мине тикшереп, сикләп тормай. Бизнес асҡанда ла, мин уға был хаҡта хәбәр генә иттем. Ул "Нимә менән шөғөлләнергә теләйһең? Мин нисек ярҙам итә алам?" тип кенә һораны. Инде нисә йылдар шулай бер-беребеҙҙең ышанысына инеп, өйрәнеп, һүҙһеҙ-бәхәсһеҙ аңлашыуға күнеккәнбеҙ. Ирем күп һөйләп тора торғандарҙан түгел, кәрәк булғанда, хәл иткес һүҙҙе әйтеп ҡуя. Мин дә уның нимәгә нисегерәк ҡарарын, нимә тиәрен алдан белеп торам. Уның холҡона яраҡлашып, ҡулайлашып бөткәнмен. Уны асыуландырмаҫҡа, кәмһетмәҫкә, баһаһын төшөрмәҫкә ярамағанлығын беләм һәм был тәртипте яҡшы тотам. Ғөмүмән, мин өйҙәгеләремдең барыһын да, хатта телефондан да кәйефтәрен дә, сәләмәтлектәрен дә, тын алыштарын да яҡшы тоям. Ғаиләмдең психологик һәм эмоциональ торошон яйлаусы ла, көйләүсе лә мин. Шунлыҡтан, эйе, мин ғаиләлә мөһимдер, тип уйлайым.

**Гөлсәсәк:** Мин әлегә ғаиләлә бер ниндәй ҙә мөһим мәсьәләләрҙе хәл итмәйем. Һәр хәлдә, хәл итмәҫкә тырышам. Бөтөн яуаплылыҡты иремдең өҫтөнә һалам һәм уның һүҙен көтәм. Хатта бик теләп тә, ул кире ҡаҡҡан мәсьәләләрҙе лә сабыр ғына кисерә алам. Ул бит барыбер минең фекеремде белде, ул хаҡта уйлап йөрөй һәм барыбер шул теләгемде ҡәнәғәтләндерергә тырышасаҡ. Беҙҙең ирем менән уртаҡлығыбыҙ күп, беҙ бер һөнәр белгестәре, һөйләшер, ҡыҙыҡһыныр нәмәләребеҙ ҙә бер-беребеҙгә аңлайышлы. Мин уны был өлкәлә белемле, төплө кеше тип һанайым һәм йыш кәңәшләшәм. Шунлыҡтан, шәхес булараҡ, мин уға конкурентлыҡ тыуҙырамдыр тип уйламайым. Ә башҡа мәсьәләләрҙә мин дә ғаиләлә үҙ урынымда мөһиммендер. Шулай уҡ беҙҙә лә минең кәйефле булыуым, ирем менән улыма иғтибар

***✓ Сит милләт ҡатын-ҡыҙының телмәрендә "йәнейем, иркәм, әйкәйем" тигән иркә һүҙҙәр бар. Ә беҙҙекеләрҙең күптәре ундайҙы әйтергә лә тартына. Әлбиттә, үҙгәрергә лә булалыр. Тик был беҙҙең үҙебеҙҙе бәхетле итер микән?..***

# АСЫЛЫ НИ?



бүлеүем бик мөһим. Бер шелтәмдән күңелдәре төшә, бер йылмайып ҡарауымдан балҡып китә улар.

**Башҡорт ҡатын-ҡыҙын ҡырыҫ, ҡаты тип әйтеүселәр бар. Нисек уйлайһығыҙ, был ысынлап та шулаймы? Холоҡтағы был сифат милли һыҙатмы беҙҙә, әллә бының башҡа сәбәптәре бармы - нисек уйлайһығыҙ?**

**Әлфинур:** Башҡорт ҡатын-ҡыҙы борон-борондан ғаиләлә, ырыуҙа үҙәк ролде уйнаған. Ул балаларҙы ла тәрбиәләгән, мал да ҡараған, аҙыҡ та йүнәткән, кейем-һалымды ла булдырған, һыбай менеп тә йөрөгән, һәм башҡалар. Сигеү сигеп өйҙә генә ултырған йәки ирҙең артына ышыҡланып йәшәй торған зат булмаған улар. Бөгөн беҙҙе шәреҡ гүзәлдәре менән тиңләп, ниндәйҙер ят сифаттар уйлап сығарып тағалар һәм үҙҙәренең үк яңылыш фекере буйынса "ҡаты" тигән ярлыҡ та элеп ҡуялар. Эйе, беҙҙең ҡатын-ҡыҙ көслө. Сөнки улар яугир ир-егеттәрҙән тыуғандар, шундай уҡ әсәйҙәр ҡулында үҫкәндәр. Башҡорт ҡыҙҙары ҡайҙандыр икенсе ерҙән килеп сыҡмаған да һуң, улар ҙа шул уҡ милләт вәкиле. Тимәк, беҙҙең ир-егеттәр ҙә, ҡатын-ҡыҙҙар ҙа берҙәй үк таҫыллы, ныҡ. "Башҡорт ҡыҙҙары ҡаты" тигәнде бөтөнләй әйтергә ярамай, был дөрөҫ фекер түгел. Шундай мәғәнәһеҙ хәбәр менән егеттәребеҙҙә яңылыш уй тыуҙырмайыҡ! Улар бит шундай "аҡыллы" кәңәштәрҙән сит милләткә әүрәп ҡуя. Барыбер ҙә башҡорт иренә башҡорт ҡатыны ғына ҡулай ул. Сөнки беҙҙең менталитет бер. Мәҫәлән, иремдәге мин күтәрмәләгән сифаттарҙы башҡа милләт ҡатын-ҡыҙы күтәрмәләмәйәсәк, уның миндәге сифаттарҙы ҡабул иткәнен башҡа милләт ире ҡабул итмәйәсәк. Был - тәбиғи.

**Гөлшат:** Бөгөн ҡатын-ҡыҙҙа иркәлек, буйһоноусанлыҡ кеүек йомшаҡ сифаттар тәрбиәләү тураһында күп яҙалар. Шуларҙы уҡыйым, үҙемдә ҡулланып ҡарайым, хатта психологка ла йөрөгәнем булды. Йәнәһе, юхалай белеүгә, ыңғайға һыпырып ҡына тороуға өйрәнәм инде. Тик был тырышлығым ике-өс аҙнанан арыға етмәне. Ирем дә улай үҙгәрергә тырышыуымдан көлдө генә. Икенсе яһалма холоҡҡа аяҡ осонда ғына баҫып йөрөй. Шунан сығып, холоҡтарҙы ла сағыштырығыҙ. Сит милләт ҡатын-ҡыҙының телмәрендә "йәнейем, иркәм, аҡыллым, әйкәйем" тигән иркә һүҙҙәр бар. Ә беҙҙекеләрҙең күптәре ундайҙы әйтергә лә тартына. Нисек кенә булмаһын, үкенескә ҡаршымы-түгелме, был беҙҙең гендар, ҡан аша бирелгән милли һыҙат. Әлбиттә, әлеге психологтар һәм башҡалар кәңәшен тотоп, үҙгәрергә лә булалыр. Тик был беҙҙең үҙебеҙҙе бәхетле итер микән?..

**Барығыҙҙың да ғаиләһендә ир балалар бар. Ниндәй килендәр теләр инегеҙ? Үҙегеҙ һымағына риза булыр инегеҙме?**

**Әлфинур:** Мин бындағы ҡорҙаиң олоһомон, шуға үҙ күҙлегемдән сығып әйтәйем әле. Йәшерәк ваҡытта мин дә ҡырыҫыраҡ, ҡатыраҡ инем ул. Йәшәй бара, олоғая бара үҙгәрәм шикелле. Йылы ашы, йомшаҡ һүҙе булмаған ҡатын нимәгә ул, тип уйлайым. Бәлки, улым үҫә бара ла тыуалыр бындай уйҙар. Улыма бит мин насар ҡатын теләмәйем. Ул бит минең атаһына булған мөнәсәбәтемде күреп тора. Уның күҙ алдында ана шул ваҡиғалар ғаилә тормошон формалаштыра ла бит. Мин атаһына хөрмәт күрһәтмәйем, атай дәрәжәһен күтәрмәйем икән, улым быларҙы ҡатындан көтөргә икәнде лә аңламаясаҡ. Ысынында, үҫеп килгән улым мине күпкә йомшартты, бығаса иҫемә төшмәгәндәрҙе лә аңғарт-инергә маташыу мөмкин булмаған хәл икән ул. Шунлыҡтан, шулай ҡатыраҡ, ҡырыҫыраҡ булһам да ысынмын. Мине аңлаған кешеләр минең кем икәнемде белә. Ә бына психологтар әйткәнсә, йүгереп барып ҡосаҡлап үбә, "һөйөклөм-ҡәҙерлем" тип өҙөлөп тора алмайым инде, ундайға өйрәнелмәгән.

**Гөлсәсәк:** Башҡорт ҡыҙының, ҡатынының холҡо бер бөгөн генә барлыҡҡа килмәгән бит. Был быуаттар буйына халыҡтың тарихы, йәшәйеше, көнкүреше һәм башҡа факторҙары аша формалашҡан. Һеҙ бына башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары бейеүен алығыҙ ҙа, уны башҡа берәй халыҡтыҡы менән сағыштырығыҙ. Беҙҙекеләр үксәлә тыпырҙап бейей, ә бүтәндәр башлыса ты. Элек нимәгәлер һүҙ ҡуйыртырға ғәҙәтләнһәм, бөгөн өндәшмәй ҡалыуҙы хуп күрәм. Сөнки буласаҡ ғаилә башлығы ҡатын-ҡыҙҙың юҡ-барға сарбаулап тороуына күнекмәһен тейем. Улыма ҡарап, иремде яҡшыраҡ аңлай барам кеүек. Һәм, малайҙар әсәйҙәренә ҡарап ҡыҙ һайлай, тигәнгә таянып, уға ла яҡшыраҡ өлгө күрһәтергә тырышам.

**Гөлшат:** Минә ҡәйнәм: "Улыма әл дә һин тура килгәнһең", - тигән һымағыраҡ һүҙҙәр әйтһә, мин эстән: "Минең улдарыма миндәйе түгел, бик һәйбәт, ыңғай ғыналары тура килһен инде", - тип уйлайым. Тағы ла, ул ҡатын тәтәй генә булып та ултырмаһын, ә иренә, балаларына ҡыҙыҡлы, уларҙы әүрәтә алырҙай, бергә эшләрҙәй, йәнәш барырҙай ҙа булһын, тиһең... Борсолам, әлбиттә, борсолам. Бәлки, мин бөгөн ҡайһы бер нәмәләрҙе дөрөҫ тә эшләмәйемдер, әммә бына Әлфинур апай кеүек, мин дә ҡайһы бер нәмәләрҙе тора-бара аңлармын тип өмөт итәм.

**Гөлсәсәк:** Улыма уны үҫтерә, алға этәрә йәки уның үҫешенә булышлыҡ итә торған ҡатын теләйем. Ул ҡатын уны артҡа һөйрәп, ығы-зығыға күмеп, ваҡ мәсьәләләргә сорнап ултырмаһын. Ә алға барыуға, ниндәйҙер файҙалы эштәр менән шөғөлләнеүгә илһамландыра алһын. "Уҫал йәки йомшаҡ" булһын тип тә әйтмәйем. Әгәр уның уҫаллығы ир-егетте алға әйҙәүгә йәки йомшаҡлығы ир-егеттең үҙ баһаһын күтәреүгә булышлыҡ итә икән - әйҙә, булһын. Тик ул ошо ҡатында йән тынyслығы ла таба алһын, дуҫ та итһен, балаларының әсәһе итеп тә күрһен. Һәр хәлдә, үҙем иремә шулай булырға тырышам һәм буласаҡ киленемдең дә шуға ынтылыуын теләр инем.

**Ҡатын-ҡыҙға был тормошта үҙ урынын табыу, аяҡҡа баҫыу өсөн ғаилә, бала ҡамасауламаймы ул? Бына һеҙ, йәшлеккә ҡабат ҡайта алһағыҙ, ошо уҡ юлды һайлар инегеҙме, әллә был уңыштарға башта үҙаллы етеп алырға теләр инегеҙме?**

**Әлфинур:** Юҡ, мин ҡатын-ҡыҙҙың ваҡытында кейәүгә сығып, ваҡытында балалар табып ҡалыуы яҡлымын. Егерме биш йәшкә тиклем ҡыҙ бала әсәй булырға тейеш. Артабан уның күп нәмәгә ҡарашы үҙгәреп китеүсән. Балаларыма ла был хаҡта әйтеп торам, беҙгә үҙ милләтебеҙҙән ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар алып килегеҙ, тәмле-тәмле ейәндәр алып килегеҙ, тип ҡолаҡтарына һалып йөрөйөм. Был мәсьәләне атай-әсәй күҙ уңынан ысҡындырмаһын, юғиһә, йәштәр бөгөн сит халыҡтар менән дә йыш аралаша, сит мәҙәниәт йоғонтоһона ла бирелә. Ә беҙҙә ғаилә культы алға ҡуйылған, ғаиләһеҙ беҙҙең киләсәк тә юҡ. Балаларығыҙҙың тулы ҡанлы тормош менән йәшәүен, һау-сәләмәт, ҡараулы булыуын теләйһегеҙ икән, мотлаҡ уларҙы ваҡытында күҙле-башлы итергә кәрәк.

**Гөлсәсәк:** Мин дә шул фекерҙә. Бына беҙ ирем менән бергә уҡыйбыҙ, бергә фәнни эштәр башҡарабыҙ, бергәләп күп нәмәгә өйрәнәбеҙ. Хатта шәхес булараҡ та бер-беребеҙгә яраҡлашып формалашабыҙҙыр тип уйлайым. Был үҙенә күрә яҡынлыҡты, бербөтөнлөктө барлыҡҡа килтерә.

**Гөлшат:** Кейәүгә сыҡҡанда миңә ун туғыҙ ғына йәш ине. Уйлап ҡараһаң, бөтөнләй балаға кеүек. Шунлыҡтанмы, мин иремә өйрәнеү, ниндәйҙер ҡытыршылыҡтарҙы үтеү һымаҡ нәмәләрҙе хәтерләмәйем дә. Улар булмағандыр ҙа, бәлки. Сөнки беҙ, әлеге ҡыҙҙар әйткәнсә, бергә үҫтек һәм бергә уйларға, бергә эшләргә өйрәндек. Бизнесты ла бергә башҡарып киләбеҙ. Унһыҙ мин нимә эшләр инем икән? Ул хаҡта уйлай ҙа алмайым...

**Ҡәйнәләрегеҙ менән ниндәй мөнәсәбәт тотаһығыҙ? Ҡәйнә-килен араһы беҙҙең халыҡта нисек ҡоролған?**

**Әлфинур:** Мин хәҙер тәжрибәле килен инде. Күп нәмәне аңлап һәм ҡабул итеп өйрәнгәнмен. Ҡәйнәм менән дә уртаҡ яҡтарыбыҙ етерлек. Ул да, мин дә уҡытыусыларбыҙ, тимәк, һөйләшер һүҙҙәребеҙ ҙә күп. Ирем дә йәш саҡтан уҡ мине әсәһенә оҡшатырға тырыша ине. Бер эшкә салбар кейгәйнем, ул "Әсәйем һәр ваҡыт юбка-костюм кейҙе, һин дә шулай ит", - тине һәм мин дә шуға күнектем. Ҡәйнәмдәр ғаиләһендә шул тиклем кешегә иғтибарлылар, берәй байрам-мәҙарына бүләк яһап, яғымлы ҡараш белдереп торалар. Мин унан ошо матур ҡылыҡҡа өйрәндем. Шулай уҡ сабырлыҡҡа, баҫалҡылыҡҡа ла һәм тағы ла бик күп ыңғай күренештәргә. Ҡәйнә-килен мөнәсәбәте беҙҙең халыҡта барыбер ҙә әхлаҡи, әҙәп нормаларынан сыҡмай ул. Әсәй, ҡәйнә культы юғары әле, Аллаға шөкөр.

**Гөлшат:** "Ҡәйнәлекте ҡәбергә алып китмәм, ул һеҙгә ҡалыр", тигән ти бер ҡәйнә килендәренә. Шуның кеүек, был статус та бер саҡ беҙгә ҡалыр һәм беҙ үҙебеҙгә ниндәй мөнәсәбәт теләрбеҙ? Иң беренсе шуны уйларға кәрәк.

Иртә килен булып төшкәс һәм бар аңлы тормошом ҡәйнәм менән үтеп барғанға микән, мин әсәйемә ҡарағанда ҡәйнәмде яҡшыраҡ беләм кеүек. Һөйләгәндә лә йышыраҡ уның хаҡында һөйләйем. Ул мине ҡыҙы кеүек ҡабул иткән, беҙҙең һүҙебеҙ берегә, уртаҡ серҙәр тотабыҙ. Бөтөн яҡтан да ярҙам итергә тырышып тора, балаларыбыҙҙы ҡараша. Нисек итеп уға насар ҡараш күрһәтергә мөмкин - аңламайым...

**Гөлсәсәк:** Башҡорт килендәрендә ҡәйнәгә буйһоноу кәмһенеү йәки түбәнһетелеү түгел. Был тәртип олоно ололау, иреңде тыуҙырыусыны хөрмәтләү ул. Һәм бөгөн дә ниндәй генә дәрәжәле һәм заманса килен дә ҡәйнәһен ололай белергә бурыслы. Ҡәйнә-килен араһындағы мөнәсәбәттең боҙолоуы ул ғаиләнең психологик торошон да ҡаҡшата, ундағы ағзаларҙың йән тынyслығын ала. Ғаиләһендә тынyслыҡ һәм аңлашыусанлыҡ булыуын теләгән килен иң беренсе ҡәйнәһе менән дуҫлашырға тейеш. Беҙҙең ҡартәсәйебеҙ беҙҙең ғаиләнең бер йәме ул. Уның эштәренән бушап, беҙгә иғтибар бүлгәнен көтөп кенә торабыҙ.

**Бөгөн интернет донъяһындағы ҡатын-ҡыҙҙар араһында матурлыҡ синдромы барлыҡҡа килде. Фитнес залдар, диеталар, модалы кейемдәр һәм башҡалар менән сыбарланды экрандар. Матур булыу өсөн һеҙ нимәләр эшләйһегеҙ? Һәм нимә ул һеҙҙеңсә матурлыҡ?**

**Әлфинур:** Һәр йәштең үҙ матурлығы була. Мәҫәлән, миңә бөгөн егерме йәшлек ҡыҙҙар матурлығын эҙләргә лә ярамай. Ҡыҙҙар зифалығын, ҡыҙҙар төҫөн көҫәп, пластик операциялар яһатыу, диеталар менән ғазапланыу кеүек алымдар ҡулланыу иҫәрлектер, тим. Йәшәй-йәшәй кешене эске матурлыҡ нығыраҡ биҙәйҙер. Әлеге йәшемдә мин күңеле яҡты, йөрәге таҙа булған әҙәмдәрҙе яҡшыраҡ күрәм һәм ҡабул итәм. Бит, кәүҙә ҡупшылығы аҙыраҡ йәлеп итә. Ә инде үҙ-үҙеңде ҡарау, бөхтәлек, кейенә белеү кеүек төшөнсәләр менән ризамын. Ҡатын-ҡыҙҙың дөйөм сифаты күркәм булырға тейеш.

**Гөлшат:** Әлбиттә, һәр ваҡыт матур булғы килә. Мөмкин тиклем үҙемде ҡарарға, сәләмәтлекте лә, башҡаһын да иғтибар үҙәгендә тоторға тырышам. Интернет донъяһындағы матурлыҡ төшөнсәһенә минең тормошом тура килеп етмәй. Ул төшөнсәләрҙе лә кем уйлап тапҡандыр ҙа, ҡатын-ҡыҙ ниндәйҙер нормаларҙа булырға тейеш тип кем әйткәндер? Минең үҙ нормаларым, һәм шулар менән ҡәнәғәтмен.

**Гөлсәсәк:** Хәҙер интернетта ла, урамда ла бер төҫлө, бер ҡиәфәтле ҡатын-ҡыҙ күбәйҙе. Тик был матурлыҡ билдәһе түгел. Матурлыҡ ул һәр ҡатын-ҡыҙҙың үҙ фиғеле, үҙ эске донъяһы һәм үҙ нәфислеге булыу.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Был ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ үҙҙәре лә шундай төрлө ҡарашлы, төрлө хис-тойғоло, төрлө холоҡло булып сыҡтылар. Уларҙың телмәрҙәре лә, фекерҙәре лә, йәшәү рәүештәре лә бер-береһенекенән ҡырҡа айырыла. Әммә уларҙы бер төшөнсә - ҡатын-ҡыҙ асылы берләштерә. Шул асыл берлегендә беҙ рәхәтләнеп һөйләштек, көлөштөк, бер-беребеҙгә теләктәшлек белдерҙек. Ҡатын-ҡыҙ ҡайҙа ла ҡатын-ҡыҙ инде...**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА әңгәмәләште.**

***✓ Йәл булып китте уға сауҙагәр. "Шәп нәмә ул үлем, - тип уйлап алды үҙе нишләптер. - Тик ул шулай тиҙ генә барыһын да тигеҙләй ала. Байын да, ярлыһын да, ҡашлыһын, ҡашһыҙын да, асын да, ашлыһын да..."***




Таң һарыһынан, ҡояш тышау буйлыҡ ҡына күтәрелгәс, килде Нурислам Фәрит ағайҙарға. Хужалар иртәнге сәйгә ултырып ҡына торалар ине. Яҡты йөҙ менән ҡаршы алмаһалар ҙа, сәйгә әйҙүкләнеләр. Нурислам тегеләрҙең күңелен күтәрергә тырышып мәрәкәләп тә маташты:

- Һөйгән йәр менән сәйҙән кем туйған. Еңгә, һинең ҡулыңдан һыуыҡ һыу ҙа ҡайнар була торған, - тип табын артына килеп ултырҙы.

- Таң әтәселәй иртәләгәнһең, хәбәрең изге булһа ярай ҙа.

- Беҙ, тәртип һағындағы әҙәмдәр донъяның бысраҡ яғында йөрөйбөҙ, шуға күрә... таң менән килһәм дә, ҡояш күтәреп килмәм, - тине Нурислам, шунан етди төҫ алды. - Хәлегеҙҙе бик аңлайым, ағай, еңгә. Шуға килдем дә, - баллап рәхәтләнеп тирләп китеп сәй эсте.

- Нимә тимә, барыбер һәр балдың үҙ тәме. Һеҙҙең умарталыҡ Йәнекәй артында, эйе, бит? Шырлыҡ яланында.

Фәрит ағай, шулмы инде әйтер һүҙең, тигәндәй, сәйер генә ҡарап алды лейтенантҡа. "Был әллә ҡорттарға үрелмәксеме? Малайҙы ҡотҡарам тип, бейәне алып китеүе лә еткән. Закон ҡуша, тип начальствоһының ҡушҡанын үтәп йөрөй инде. Уйлаһаң, шул да булдымы эш! Кешеләрҙе илатып, гәйепләне бығаулып, үҙенә күпме гонаһ алып. Дә-ә, донъяның бысраҡ яғында шул, - тип уйлап алды. - Тик барыбер умарталыҡты биреү юҡ, ҡортһоҙ бөтөнләй аяҡ һуҙырға ҡала лаһа".

- Эйе, шунан?

- Бына шул яҡтың балы барыбер тәмле ул. Телдә ереп кенә ҡалмай, телде еретеп алып инеп китә. Ой, тәмле. Ә бына беҙҙекендә, Түңәрәк яландыҡында, бер ҡырҡыу ғына тәм була. Күрәһең, аралары килешмәгән бер сәскә бар. Ә былай яландарҙың аралары йыраҡ та түгел.

- Бер устағы бармаҡ та төрлө, әйттең хәбәр. Берҙәм генә ауылыбыҙҙа ла ана төрлөһө бар, ярҙам итерҙәй миһырбанлыһы ла, ошаҡсыһы ла, - кейефһеҙ Сәлимә лә һүҙ ҡыҫтырҙы.

- Кем ошаҡлаған, белдеңме? - Фәрит ағай үҙе лә балға үрелде.

- Прокуратуранан Лаврентьев тигәненән һорағайным, бер исемде әйтте ул. Тик... мин уның кем икәнен әйтергә тейеш түгелмен.

- Дә-ә. Ауыл эстән дә серей башлаған икән. Утыҙ етенсе йылғы репрессия афәтендә Ташлыйылғанан бер генә кеше лә атылмаған да, үлтерелмәгән дә. Сөнки бер-береһен һатыусылар булмаған. Замана ҡорто күңелдәргә, йәндәргә лә әйәләгән икән. Дә-ә... бер-берең бөтөрөү сире, - уфтанды хужа.

Сәйҙең дә, балдың да тәме китте.

- Нурислам ҡустым, Фәнилде алып ҡалып булмаҫ инде хәҙер. Министр ҙа гәйепле тигәс...

- Юҡҡа Өфөгә яҙғанһығыҙ. Министрҙың яуабынан һуң тағы ла сәмләнеп тотондолар. Башҡа урмандарҙа ла рейдтар күбәйҙе. Фәнил эше хәҙер - көн үҙәгендә. Башҡаларға һабаҡ булһын, йәнәһе. Шуға күрә тиҙерәк аҡса йыя һалайыҡ та ҡотолайыҡ был мәхшәрҙән. Эш хәтәргә китмәксе.

Нурислам бирешеп киткән ата менән әсәне йәлләне. Фәнилдең һуғышып 15 тәүлеккә эләккәнен әйтмәй торҙо. Килеү сәбәбе лә ул түгел ине.

- Ярҙам итер кешебеҙ ҙә бөттө инде.

Нурислам тороп салбар кеҫәһенә тығылды ла унан аҡса килтереп сығарҙы.

- Ауыл менән булһа ла йыйып алайыҡ инде, Фәрит ағай. Ул түрәләргә боронғо йолаларыңды аңлатыуҙан фәтеүә юҡ. Бына минән өс мең, шунан артығын бирә алмайым. Оло ҡыҙ бер балаһы менән әле ҡайтты. Уныһы бер йөк. Байыған, бирерһең әле. Бирмәһәң дә...

Фәрит ағай һул ҡулын һелтәне:

- Ана, Сәлимә апайыңа бир. Рәхмәт, погонлымын, тип тормайһың, хәлгә инә беләһең. Атаңа оҡшап миһырбанлыһың. Эш аҡсала түгел. - Шунан тороп Нурисламды ҡосаҡлап алды.

- Бер йыл бүҙәнә туҡ, бер йыл тартай туҡ, тигәндәй, беҙҙең дә туҡ саҡ булыр, ҡайтарырбыҙ, Нурислам туғаным, рәхмәт инде, - тип Сәлимә лә әҙмәүерҙәй ирҙең арҡаһынан һөйөп алды.

- Бейәне Поляковкаға алып барып яптығыҙ ҙа, ябыҡтырып нишләтәһегеҙ һуң уны? Нимәләр хәл итергә кәрәктер бит, - Фәрит ағай уныһын да ныҡлап белешергә булды шикелле.

- Бейәнде бирергә булһаң, Поляковкалағы ит комбинаты директоры ун биш меңгә алырға риза булып тора ул.

- Ун биш бик аҙ, егермегә, бер ҙә булмаһа ун һигеҙгә булһа ла алһын, - тигән булды Фәрит ағай. Бейәһе йәл ине, әлбиттә. Ярай ҙа тайы бар. Йыл да булмаһа ла, ике йылға бер булһа ла, ҡолонлап ҡыуандырып торҙо. Йәше лә ярамлы. Улы өсөн бейәне улай уҡ йәл түгел. Тик ҡортһоҙ ҡалып булмай. Улайһа был йорттан да, нәҫелдән дә бөтөнләй ҡот китәсәк.

- Һөйләшермен дә ул. Ауыл халҡына мөрәжәғәт итәйек. Иғәнә йыйырға кәрәк. Ауыр сакта бер-беребеҙгә ярҙам иткәнбеҙ, уның бер ниндәй ояты юҡ, - полиция лейтенанты тороп ике ҡуллап күрешеп сығып китте.

- Хәйер һорашкан кеүек иғәнә йыйып йөрөп булмаҫ, ишеткәндәр килтерер, - тине Фәрит ағай. "Һоранып йөрөмә", тип аңғартыуы ине бисәһенә.

* * *

- Ҙур йомош менән килгәйнем. Көҙгә тиклем биш мең аҡса биреп тор әле, ағай. Тоҡомло ғына үгеҙ буй еткереп килә. Шуны һатып булһа ла, түләрмен. Бик кәрәк ине, - Рәүеф Хамматҡа күҙ төбәп килде. Биреп тормаҫмы, йәнәһе. Фәнил ауыр хәлдә, нисек тә булһа дуҫына ярҙам итергә тейеш тә һуң. Аҡса юҡ, тип ҡул һелтәп булмай. Әлеге лә баяғы шул сауҙагәр Хаммат бар әле әл дә. Рәүефтең аты ла, затлы ғына берәй ҡоралы ла юҡ шул. Дуҫы өсөн йәл булмаҫ ине лә.

Хаммат оҙаҡ ҡарап торҙо уға.

- Нимәгә ул тиклем? Космосҡа осорға йыйынмайһыңдыр бит.

- Фәнилгә бирәм. Штрафын түләмәһә, ултыртып ҡуясаҡтар.

- О, Фәнилгә. Мәрхәмәтлек, тимәк. Шәп. Гәйебе булғас, ултырһын. Бында минен ни эшем бар? Аҡса юҡ.

Рафа ни әйтергә белмәй шаҡ ҡатты. Шунан сырт итеп бер төкөрҙө лә:

- Эй яуызның да инде, Хаммат ағай, - тине.

- Аҡса биреп тороусы мин - яуыз, теҙләнеп һоранып килеүсе һин - мәрхәмәтле. Бик ҡыҙыҡ һеҙҙең философия. Яуызлыҡ менән мәрхәмәтлек сиген заман үҙе билдәләй, ул һеҙҙең асыҡлауға, аныҡлауға мохтаж түгел.

- Биреп тораһыңмы, юҡмы? - Рафаның мин-минлеге сыға башланы. Буш сыҡҡыһы ла килмәне. Башҡа аҡса алып торор кеше лә юҡ, исмаһам.

- Ике ҡашыңды ла ҡырһаң, ике мең биреп торам. Бурысҡа! Ҡашһыҙ итәм мин һеҙҙең барығыҙҙы ла.

- Нишләп?

- Ауылдың бәрәкәтен бөтөрөп эсепһоранып йөрөмәһен өсөн. Артыҡ ғорур Фәнил дә береһен ҡырғайны, Шамил да. Хәҙер һинең сират. Башҡаса меҫкенләнеп йөрөмәҫһегеҙ. Бәлки... - Бер аҙ торғас тағы өҫтәп ҡуйҙы. - Фәнил бик дорфа һөйләшә ине, кикереген шиңдерерҙәр әле унда.

- Аңлап етмәйем, нимә ул тиклем Фәнилгә ҡаҙалдың. Уның гәйебе юҡ икәнен беләһең дә инде. Киреһенсә, хәленә инер урынға...

- Нимә, хәленә инәйем, тип к...тәге ыштанды сисеп бирәйемме?

- Минә биреп тор. Биш мең. Көҙөн алты мең итеп ҡайтарырмын.

- Ул тиклем аҡса юҡ. Әйттем бит, ике ҡашыңды ла ҡырһаң, ике мең биреп торам. Ҡабатлайым, бурысҡа уныһын да.

"Башҡаса вариант юҡ. Үсер әле ҡашы. Ҡыҙҙар артынан сабаһы башым юҡ. Нимәгә кәрәк ул? Ә Фәнилгә кәрәк".

- Бир ҡырынғысыңды.

- Ана мунсаға, шунда.

Рәүеф мунсаға инеп киткәс, өйҙән аҡса алып сыҡты ла, алмағас төбөндәге өҫтәл артына барып ултырҙы Хаммат. Йөрәген тотто. Һуңғы йылдарҙа ул да ҡаҡшаны.

"Әллә кем булып маһайып ултырған булам. Нимәм бар инде маҡтанырлыҡ. Күркәм бейек йорт, шәп мунса, ана, машина, магазины бар... Шунан? Бай, имеш, бәрәү. Барыһы ла бар, барыһы ла. Тик... бәхет юҡ. Тупылдатып һөйәр балам юҡ. Ғүмер буйы яратмаған кешең менән йәшәп ҡара әле, шуның күҙенә ҡара, шуға арҡа терәп ят, ашын-сәйен маҡтаған булып ултыр... Артислыҡ, һаламлыҡ. Ә былай барыһы ла бар, бөгөн ҡояшҡа, айға осмайһыңмы? Хет Парижға барып ҡайт. Тик барғы килмәй, осорға ҡанат юҡ. Күңелдә.

Ваҡытында Сәлимәне ҡаратып алғанда, Фәнил кеүек әҙмәүерҙәй улым булыр ине. Ярай әсһен дә, ти, уныһы, баш төҙәтергә аҡсаһын да бирер ине. Уның ҡарауы улың, дауамың бар. Их-х. Ғүмер үтте, байлыҡ артынан ҡыуып, түрә-ғараһы һыйлап, ябай эш кешеһен алдап... Бөгөн үлһәм, ҡәберемә ҡәҙерләп тупраҡ һалыр кешем дә юҡ бит. Эйе, барыһына ла Хаммат кәрәк, башы ауыртҡанда, аҡсалары етмәй ҡыҙы кейәүгә сыҡҡанда, балнисҡа алып барырға, хатта малына яларға тоҙо булмағанда ла... Шула-ай, һәр кеменә ваҡытлыса кәрәк булдым, тик ҡәҙерле булманым.

Ҡашһыҙ ир-егет - ил-йортһоҙ әҙәм ул. Берәҙәк. Үҙемдең ул юҡ икән, һеҙҙе лә асарбаҡ итәм. Әйҙә йөрөгөҙ ҡашһыҙ.

Ә үлеп китһәм... Ошо ҡашһыҙ егеттәр ҡүмәсәк тәһә. Ҡарағасһыҙ ҡәбер ҡалҡасаҡ. Уны ҡырҡып, бурап алып төшөр вариҫым ҡайҙа? Их-х... Мотор ҙа ҡартайҙы, йыш барахлить итә..." - Хаммат йөрәгә тапҡырын ышҡып-ышҡып шулай уйланып, моңайып ултыра бирҙе.

Ҡашһыҙ битен ҡояшҡа ялтыратып килеп сыҡҡан Рәүефтең:

- Бир, - тигән тауышына һиҫкәнеп китте.

Сауҙагәр тейешле сумманы өҫтәлгә һалды. Рәүеф аҡсаны кеҫәһенә һалды ла ҡуҙғалырға ниәтләне. Шул саҡ Хамматтың меҫкен генә тауышы сыҡты:

- Ҡара әле, Рәүеф ҡустым, бер уй төштө башҡа.

- Һинең ҡара уйың бөтмәҫ ул, Хаммат ағай. Башҡа ерҙе ҡырмайым, пока.

- Туҡта әле, туҡта, әгәр һинә алтмыш мең аҡса бирһәм... - әйтеп бөтөрә алмаһа, йөрәген тотоп ултыра бирҙе.

- Нимә? - Рәүеф янынан яҡынлашты.

- Ултыр, - тине Хаммат. Тегеһеһе ҡулын күтәреп, алмағас ботағына тотоноп тороуын белде. - Бер һүҙ әйтмәксе инем. Әгәр... ну, был ерҙә бер кем дә мәңгегә килмәгән бит инде. Беләһең, ҡатындан башҡа бер кем дә юҡ тигәндәй...

- Нимә мығырҙайһың, әйтһәң әйт тә. Ниндәй алтмыш мең?

- Мин үлһәм, һин миңә ҡарағас... - әйтеп бөтөрә алманы, тамағына төйөр килеп тығылды.

Рәүеф ҡулдарын йоҙроҡлап өҫтәлгә таянды, ҡашһыҙ майлайын йыйырҙы ла:

- Үлһәм? Ҡарағас? Ҡәберенәме? Сразы алтмыш мең һум штраф та түләйһеңме? Минме? Туҡ-туҡ, зый-зый, - балта менән һелтәнгәнен, ағастың һыҙғырып ауыуын хәрәкәттә күрһәтеп, тыныс ҡына әйтте.

Хаммат йәш менән мөлдөрәмә тулы күҙҙәрен Рәүефкә төбәп ҡараны ла, ике тапҡыр башын һелкте. Һелккән ыңғайы бер күҙенән эре генә күҙ йәше тәгәрләп төшөп китте. Ҡашһыҙ егет уға оҙаҡ ҡына хайран ҡалып ҡарап торҙо. Йәл булып китте уға сауҙагәр. "Шәп нәмә ул үлем, - тип уйлап алды үҙе нишләптер. - Тик ул шулай тиҙ генә барыһын да тигеҙләй ала. Байын да, ярлыһын да, ҡашлыһын, ҡашһыҙын да, асын да, ашлыһын да... Әжәл етә башлаһа ғына әҙәм барыбыҙға бер Ер шары икәнен иҫенә төшөрә. Баҡһаң, унан ары осоп китеп булмай икән дә. Төшөп ҡалыр ваҡыты еткәс, минең кеүек ҡашһыҙҙар менән кешесә һөйләшә. Үлергә йыйынамы был ҡарт төлкө? Белә, ул үлгәс тә, Ер шары әйләнеүенән туҡтамаясаҡ әле".

- Алтмыш, тинеңме?

Хаммат тағы баш һелкте. Тулышҡан күҙ йәше икенсе күҙенән дә ағып китте.

- Әҙерәк. Һин үлгәнсе хаҡтар үҙгәреп китеүе лә бар, минең хеҙмәт, тәүәккәллек осоҙ баһаланмай. Һикһән мең! - Рәүеф тегенең күҙенә тура ҡараны.

Хамматта сауҙагәрлек кәрәк уяндымы, әллә өмөтләнеп киттеме, күҙен һөрттә лә:

- Етмеш, - тине.

- Ярай, ә ҡасан бирәһең? Үлгәсме?

- Йыям да килһе айҙа.

- Дурак һин, Хаммат ағай.

- Нишләп? - Хаммат урынынан ҡалҡты.

Рәүеф тә Фәнил кеүек уртансы бармағын күрһәтте лә:

- Үлһәң, һаҙға алып барып ҡуясаҡбыҙ. Ә һинә тигән ҡарағас... орлоғонда уҡ серегән, - тип сығып китте.

Күҙҙәрен сырт-сырт йомоп тороп ҡалды Хаммат.

**(Дауамы бар).**

*✓ Ауылда булмаған балаларҙың ысын бала сағы ла булмағандыр, моғайын. Хәҙер инде ауылда өләсәй генә. Ә инде минең гәзит-журналдарға, телевидение-радиоға башҡорт телендә интервью биреүем өләсәй өсөн ҙур ҡыуаныс.*

*ӨФӨ БАШҠОРТО*

**"Юҡ, сибәрҙәр сибәр түгел, һөйгәндәр генә сибәр", тип яҙған заманында халыҡ шағиры. Ысынлап та, шулайҙыр ул. Хатта әллә ни күҙгә ташланып бармаған ҡатын-ҡыҙға бер йылы һүҙ әйтеү ҙә уны күҙ алдында икенсе кешегә әйләндереүе мөмкин. Бәлки, матурлыҡ уны күрә белеүгә һәм йылы һүҙгә генә мохтаждыр? Ғөмүмән, матурлыҡтың стандарттары ниндәй? Бөгөнгө әңгәмәсебеҙ - Өфө башҡорто, барлыҡ стандарттарҙы юҡҡа сығарған стандарт булмаған модель, Stikhia студияһы етәксеһе, тәбиғи матурлыҡты пропагандалаусы халыҡ-ара конкурстар еңеүсеһе һәм ҡатнашыусыһы Эльвира Хәләф ҡыҙы ИШМОРАТОВА.**

# МИНЕҢ ТАМЫРҘАРЫМ АУЫЛДА



**➔ Атайығыҙ республикала билдәле дәүләт эшмәкәре, шундай атайҙың ҡыҙы булыу һәм тормошта үҙ һүҙеңде әйтеү, үҙеңдең "минеңде" күрһәтеү ауыр түгелме?**

- Лайыҡлы тәрбиә биргәндәре өсөн атай-әсәйемә һәм өләсәйемә бик рәхмәтлемен. Ә ауырлыҡтар, һынауҙар улар һәр кемдә лә булалыр. Бында мәсьәлә кешенең эске ныҡлығына, ихтыярына бәйле: һынауҙарҙан бөгөлөп төшәләрме, әллә бер нәмәгә ҡарамай, үҙҙәренең хыялдарына, маҡсаттарына табан баралармы. Минең эшмәкәрлек өлкәм һәм тәүге еңеүҙәрем республиканан ситтә яуланды һәм унда кем ҡыҙы икәнемде бөтөнләй белмәнеләр. Башҡортостанда тәүге ваҡыттарҙа "атаһы ярҙам иткәндер", "атаһы һатып алғандыр" тигән комментарийҙарҙы ауыр ҡабул итә инем, ғәмәлдә, атайым мине бөтөнләй икенсе өлкә кешеһе итеп күрергә теләне һәм минең был эшмәкәрлегемә бөтөнләй ҡыҫылманы. Ҡайһы бер ваҡыттарҙа, киреһенсә, фамилиям арҡаһында үҙемдең "минем"де күрһәтеү икеләтә ауырға төштө. Ташламалар булманы. Хәҙер иһә үҙемдең уҡыусыларыма һәр саҡ: "Һеҙҙәге үҙгәрештәргә аудиторияның реакцияһына әҙер булығыҙ һәм арҡағыҙҙы тура тотоп, йылмайып, алға барығыҙ!" - тием.

Атайымды яратам һәм уның реакцияһын аңлайым, сөнки атай-әсәйҙәр балаларына бары тик яҡшылыҡ ҡына теләй. Беҙҙе артыҡ иркәләтмәнеләр, бәләкәй сағымда хатта үпкәләй ҙә торғайным. Хәҙер иһә "иммунитет" тәрбиәләгәндәре өсөн рәхмәтлемен һәм ҡыуанам ғына. Атайымды белеүселәр ныҡлап минең менән аралашмай тороп, нисектер, ситләшәләр, мине "мажор" тип ҡабул итәләр ине, ә "мажор"ҙар, киреһенсә, минең ябайлығымды ҡабул итә алманы. Һуңынан мин кемгәлер яраҡлашыуҙан, кемгәлер нимәлер раҫлауҙан туҡтаным һәм үҙемдең "минемде" һаҡлап ҡалдым. Был иң яҡшы ҡарарым булды, тип уйлайым.

**➔ Ҡала ҡыҙы булһағыҙ ҙа, әңгәмәләрегеҙҙә һәр саҡ ауылды, өләсәйегеҙҙе ҡыҫтыраһығыҙ. Тимәк, улар күңелегеҙҙә айырым урын алып тора. Ғәҙәттә бит ҡала балалары үҙҙәренең ауыл менән бәйләнешен йәшерергә, тамырҙарын күрһәтмәҫкә тырыша...**

- Ғүмеремдең тәүге йылдары һәм бала сағымда каникулдарҙа олатайым менән өләсәйемдә үҫтем. Был - иң бәхетле һәм ғүмер буйы күңелдә яҡты хәтирә булып һаҡланыр мәлдәрҙер ул, моғайын. Еләк йыябыҙ, бесәнгә йөрөйбөҙ. Өләсәйҙең шәл бәйләгәнен ҡарарға ярата торғайным. Олатайым көтөү көttө. Ауыл балалары менән тауға ла сығып китеп, тауҙан-тауға йөрөгән өсөн кесерткән дә эләгә ине. Иң яратҡан шөғөлөм - сепаратор йыйыу булды. Ә инде яңы ғына бешкән ауыл икмәге йәки майикмәктең тәме һәр саҡ тел осонда тора. Хатта киноға аҡса урынына йомортҡа менән түләп ингәнемде лә онотмайым!

Өләсәйем почтальон булып эшләне һәм мин уның менән почтаны ауыл буйлап таратышып йөрөгәнлектән, һәр кеше менән танышмын. Бигерәк тә әбейҙәр менән һөйләшергә ярата инем. Почта таратып бөтөп, кире ҡайтҡанда, өләсәйҙең сумкаһы миңә әбейҙәр биргән күстәнәс менән тула торғайны.Былар барыһы ла һөйләп аңлатып булмаҫлыҡ, ҡиммәтле хәтирәләр. Ауылда булмаған балаларҙың ысын бала сағы ла булмағандыр, моғайын. Хәҙер инде ауылда өләсәй генә. Уны бик ныҡ яратам һәм оҙон ғүмер теләйем! Ә инде минең гәзит-журналдарға, телевидение-радиоға башҡорт телендә интервью биреүем өләсәй өсөн ҙур ҡыуаныс. Сәхнәгә беренсе тапҡыр сығыуым һабантуйҙарҙа булһа, хәҙер инде Халыҡ-ара мода аҙналыҡтарында. Үҙемдең тамырҙарымдан оялмайым һәм сығыштарын йәшерергә тырышҡандарҙы бөтөнләй аңламайым.

**➔ Ғаиләгеҙҙә ниндәй телдә аралашаһығыҙ? Һеҙҙең өсөн башҡорт теле нимә ул?**

- Беҙ ғаиләлә дүрт бала, мин иң өлкәне. Бала саҡтан уҡ атай-әсәйебеҙ өйҙә башҡортса һөйләшеүебеҙгә, башҡортса концерттарға һәм спектаклдәргә йөрөүебеҙгә ҙур иғтибар бирҙе. Ауылда инде тик башҡортса ғына һөйләштек. Бөгөн телде белеүем көнкүреш кимәлендә булһа ла, милли тәрбиә милләткә хас көстө һәм рухты тапшыра алған, тип уйлайым. Күсенеүҙәр һөҙөмтәһендә өс мәктәптә уҡырға тура килде. Маркетинг һәм йәмәғәтселек менән бәйләнештәр буйынса ике юғары уҡыу йортон тамамланым һәм тотороҡло етәксе вазифаһын хыялым хаҡына ташланым. Әлбиттә, ул саҡта мине хатта яҡындарым да аңламаны. Әммә мин шундай аҙымға барғаныма үкенмәйем һәм бәхетлемен. Күпме яҡшы кешеләр менән таныштым, ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә күп нәмәгә өлгәштем, күп яңы кисерештәр кисерҙем һәм күп нәмә белдем. Дөрөҫөн әйткәндә, хыялым миңә осор ҡанаттар бирҙе! Әгәр "уңайлылыҡ зонаһында" ҡалһам, үҙемдең тормошомдо бушҡа үткәргән булыр инем.

**➔ Һеҙ бөгөн бер илдә, иртәгә - икенсе, йә бер ҡалала, йә икенсеһендә... Ҡайҙа ғына булһағыҙ ҙа, моделдәр тураһында нығынған барлыҡ ҡараштарҙы һындырып, подиумға стандарттарға тап килмәгән ҡатын-ҡыҙҙарҙы сығараһығыҙ. Был нимәгә бәйле?**

- Беләһегеҙме, был һорауға мин федераль киң мәғлүмәт сараларында йыш яуап бирәм. Стандарт түгел, тигән аныҡлау Рәсәйҙә генә ҡулланыла. Көнбайышта һәм тотош донъяла ундай билдәләмә юҡ. Бары тик model, plusmodel, sizemodel тиҙәр. Минең өсөн тәрбиә нормаларынан башҡа стандарттар юҡ. Ҡатын-ҡыҙҙарҙа шул тиклем күп ҡеүәт бар, бары тик уларҙы тирә-яҡтағылар нимә уйлар, тигән ҡурҡыуы, ҡайһы берҙә комплекстары һәм ялҡаулыҡтары ғына сикләүе мөмкин. Әммә һәр осраҡта ла сығыу юлы бар!

Беҙгә стандарттарҙы сауҙа, маркетинг һәм йәмәғәтселек көсләп таға һәм, үкенескә күрә, кешеләр уны көсләп "йота". Ҡасандыр үҙем дә халыҡ-ара матурлыҡ конкурсында еңеүемә, Матурлыҡ аҙналарында ҡатнашырыма ышанмай ҙа инем. Минең дә комплекстарым булды. Әммә хәҙер девизым бар һәм ҡурҡҡан урыныңа ҡурҡыуыңды еңеп бараһың, был сифаттың бары тик үҙеңдең башыңда ғына тыуған образ булыуын аңлайһың.

Тормошомда бик ауыр осор булды һәм уны 180 градусҡа борорға кәрәк ине. Кемдер һына, кемдер ҡорбан сифатында ҡала... Ә мин йөрәгемде тыңланым һәм тойомлауыма ышанып алға барҙым. Шуға күрә, хәҙер барыһына ла, ауырлыҡтар артында үҫеш көтә, иң мөһиме, туҡтап ҡалмайынса, юлыңды артабан дауам итергә кәрәк, тием. Үҙемдең ҡарарым өсөн бер ваҡытта ла үкенгәнем булманы. Киреһенсә, хәҙер хыялдарҙың тормошҡа ашыуын, ғүмерҙең бер генә булыуын һәм уны теләгән ваҡытта үҙгәртергә мөмкин икәнлеген беләм! Иң мөһиме - тәүге аҙымды яһарға һәм шул йүнәлештә эшләргә кәрәк. Беренсе еңеүҙәремдән һуң, ә ни өсөн проект эшләп ҡарамаҫҡа, тигән уй килде. Тәжрибәм юҡ, мода өлкәһендә белемем юҡ, бәйләнештәрем юҡ... Әммә көслө теләк һәм ышаныс бар! ВДНХ-ла Башҡортостан Күргәҙмә компанияһы менән берлектә трикотаж фабрикаһы кейемдәренән беренсе күрһәтеү үткәрҙек. Моделдәр 20-57 йәшлек, төрлө ауырлыҡта һәм төрлө буйҙа ине: студенттар, медицина, офис хеҙмәткәрҙәре, уҡытыусылар. Кадрҙарҙы социаль селтәрҙәргә һалғас, миңә бер етди дизайнер сараның Италиялағы Мода аҙнаһынан кәм булмауы тураһында яҙҙы. Күңелем үҫеп китте. Хәҙер үҙем Халыҡ-ара кимәлдә күрһәтеүҙәр ойошторам, дефилеға ҡатын-ҡыҙҙарҙы ғына түгел, хатта Олимпия чемпионын әҙерләнем. Бөтөн нәмәне эшләргә мөмкин, иң мөһиме - ҡарар ҡабул итергә генә кәрәк.

Ҡайҙа ғына булһам да, үҙемдең Башҡортостандан икәнемде әйтеп йөрөйөм. Мәскәүҙә ойошторған беренсе дефилела рус, башҡорт, грузин, украин, сыуаш ҡатын-ҡыҙҙары ҡурай моңо оҙатыуында сығыш яһаны.

**➔ Әгәр мөмкинлегегеҙ булһа, ҡыҫҡа ғына ваҡытта ҡатын-ҡыҙҙарҙы үҙгәрткән кеүек, Өфө ҡалаһында нимәне үҙгәртер инегеҙ?**

- Күберәк балалар майҙансыҡтары төҙөтөр инем. Билдәле, Өфө йүкәләрен дә һаҡлап ҡалғы килә. Төрлө: милли, спорт, ғаилә, йәштәр, ололар өсөн фестивалдәрҙе күберәк үткәрер инем. Дөрөҫөн әйткәндә, ҡаланы түгел, ә ҡала тормошоноң әүҙемлеген үҙгәртергә кәрәк. Башҡорт модаһының йүнәлешен үҫтереү зарур, мин уны тоймайым. Шулай уҡ башҡаларҙы баш ҡала менән күберәк таныштырыу ҙа мөһим: проекттарымда ситтән дә ҡатнашалар, баш ҡаланың үҙәген мөмкин тиклем күртһәтергә тырышам һәм уларҙың беҙҙәге йәшеллек, ҡаланың тау башында ултырыуы менән һоҡланыуын күрһәгеҙ икән! Шуға яйлап ҡаланы ла, бай мәҙәниәтебеҙҙе лә федераль һәм халыҡ-ара кимәлгә сығарырға ине, тип хыялланам.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

*ИР-ЕГЕТ ҺҮҘЕ*

### Әсәйемә

Көмөш беләҙектәреңде, әсәй,
Һал әле беләгеңдән.
Тәмле бәлештәр бешерсе
Һутлы ер еләгенән.
Элеккесә сәй эсәйек,
Йыйылышып, аймаҡлап.
Бәлеш тәмләп, йырҙар йырлап,
Сәйен эсеп, ҡаймаҡлап.
Көмөш беләҙектәреңде, әсәй,
Һал әле беләгеңдән.
Мейес яғып, бәлеш бешер,
Беҙгә ер еләгенән.
Әйҙә, ҡунаҡтар йыйылһын -
Беҙҙең ҡапҡа шар асыҡ.
...Күңелененң йомартлығын
Әсәйем һалған асып.

### Ҡатын-ҡыҙ

Ҡашыҡҡа һалып йоторлоҡ
Ҡыҙ-ҡырҡын.
Усаҡ яғып йылыталыр
Үҙ йортон.
Һәр берендә - нурлы ҡараш,
Ҡырҡ сыраҡ.
Улар булғас, донъябыҙҙа
Яҡтыраҡ!
Ҡашыҡҡа һалып йоторлоҡ
Ҡатын-ҡыҙ.
Бешереп ҡуйма ауыҙыңды -
Утлы ҡуҙ!
Дөрләп янып китәм инде
Мин - бер туҙ.
...Ҡатын-ҡыҙҙың һөйөүенән
Ирер боҙ.

### Бәпәй көткәндә

Кәләшем тәм-том таптыра,
Кейем, ти, туҙған.
Ҡаршы килеп булмай инде -
Балаға уҙған.
Алма-хөрмәләр ташыйым,
Тоҙло кәбеҫтә.
Кәләш инде кәләш түгел,
Гүйә - фәрештә.
Улым һырыға: "Атай, - ти,
Уйынсыҡ кәрәк!"
Ҡыуаныстан күңел йырлай,
Шатлана йөрәк.
Кәләшем алма таптыра,
Малайым - тәтәй.
...Әсә йөрәге аҫтында
Тибешә бәпәй!

### Мөхәббәт

О, Мөхәббәт! Ғашиҡ булған
Күңелде тыйып ҡара!
Шатлыҡ, ҡыуаныстарымдан
Йөрәгем сығып бара.
Күҙҙәремдән шатлыҡ йәше
Сөбөрҙәп тамып бара.
Әйҙә, һөйөү уттарында
Үҙең дә янып ҡара!
Иблис заттары ҡысҡыра:
"Ғүмерең бөтөп бара!"
Ыжламайым, йөрәгемде
Мөхәббәт өтөп бара.
Ҡанатланып осам тигән
Күңелде тыйып ҡара!
...Күкрәк ситлегенә һыймай
Йөрәгем сығып бара!

**Рамай ҠАҺИРОВ.**

ИНТЕРНЕТТАН



# АЛДЫНҒЫ БУЛЫУ...

## нәҫелдәнме?

■ Ғалимдар аҙ хәрәкәтләнеүҙең иҡтисади эҙемтәләрен баһалап ҡараған һәм байҙар һәм ярлылар араһында бер принципиаль айырма тапҡан. Билдәләнеүенсә, түбән социаль кимәл ялҡаулыҡ менән бәйле, улар шулай уҡ аҙ хәрәкәтләнә лә икән. The Lancet журналы яҙыуынса, ғалимдар 142 илдән йыйылған мәғлүмәттәрҙе анализлаған. Айырыуса аҙ хәрәкәтләнеү һәҙөмтәһендә ҡаҡшаған сәләмәтлекте кире нығытыу өсөн тотонолған сығымдарға иғтибар бирелгән. Халыҡтың түбән физик әүҙемлеге донъя иҡтисадына йылына 67,5 млрд һумға төшә. Йәки һаулыҡты нығытыу өсөн кешеләр ошо күләмдә аҡса тотона. Ғалимдар әйтеүенсә, был минималь һан, ысынында иһә һан тағы ла ҙурыраҡ булыуы ихтимал.

■ Данди университеты билдәләүенсә, яман шеш осрағында генетик мутацияларҙы гәйепләүҙән файҙа юҡ. Бында иммун системаһы үҙенсәлеге мөһим. Мәҫәлән, онкология үсешенең иң төп факторы булып иҫәпләнгән генетик мутациялар ни өсөн ир-егеттәрҙең яман шеш менән йышыраҡ ауырыуын аңлата алмай. Баҡтиһән, ир-егеттәрҙең иммун системаһы ҡартайыуға ҡаршы насар көрәшә. Ә был осраҡта яман шеш хәүефе арта. Быңдай һығымтаға ғалимдар яман шеш менән ауырыған 18-70 йәштәге 2 млн кешенең мәғлүмәттәрен өйрәнгәндән һуң килгән. Иммун системаһы ҡартайыуының төп сәбәбе - боғаҡ бизенең кибеүе. Һаҡлаусы Т-күҙәнәктәр ошо биҙҙә барлыҡҡа килә. Күҙәтеүҙәр буйынса, был биҙҙең үлсәме 16 йыл һайын ике тапҡырға кәмей. Был иһә Т-күҙәнәктәрҙең кәмеүенә һәм яман шеш хәүефе артыуына килтерә.

■ Рединг университеты ғалимдары билдәләүенсә, ҡара көртмәле мейе әүҙемлеге сығанағы булып тора. Ҡара көртмәлелә күҙәнәклек күп, шул уҡ ваҡытта шәкәр аҙ. Имтихандар алдынан көртмәле ашарға кәрәк. Һынауҙарҙа балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүселәре ҡатнашҡан. Улар компьютер экранындағы уҡты күҙәткән һәм уның йүнәлешен күрһәткән клавишаларға баҫырға тейеш булған. Был мәсьәлә алдынан көртмәле һутын эскән балалар был күнегеүҙе башҡаларға ҡарағанда 10 процентҡа уңышлыраҡ башҡарған. Быға тиклем дә ғалимдар ҡара көртмәленең антиоксидант тәьҫирен асыҡлағайны инде. Ул организмдағы шешеү процестарын да туҡтатыу сифатына эйә. Ҡара көртмәлелә флавоноидтар күп.

■ Халыҡ-ара ғалимдар төркөмө лидерлыҡ сифаттары менән бәйле ДНК молекулаһын асыҡлаған. Йышыраҡ осраҡта, лидерлыҡҡа ынтылыу нәҫелдән күсә икән. Ғалимдар 4 мең кешенең эшенә, үҙен уратып алған кешеләргә мөнәсәбәтен генетик яҡтан тикшереп, лидерлыҡ һәләтен күрһәтеү тенденцияһы менән rs4950 генотибы бәйле булыуы билдәләнгән. Әммә ғалимдар үткәргән тәжрибәләр күрһәтеүенсә, генетика ыңғай тышҡы мөхит тәьҫире менән берләшкәндә генә кеше уңышлы лидер булып китә ала. Тыумыштан кемгәләр лидер позицияһына сығыу һәм унда нығыныу мөмкинлеге бөтөнләй бирелмәнә лә, лидерлыҡ сифатының бер өлөшөн тәрбиәләп була, ти ғалимдар.

АФАРИН!

**Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө алдынан "Торатау" Конгресс-холл бинаһының тамаша залында "Ҡатын-ҡыҙ - милләт әсәһе" республика конкурсына йомғаҡ яһалды. Өсөнсө тапҡыр үткәрелгән конкурстың тантаналы бүлəкләү сараһында республиканың төрлө төбәктәренән һөнәри өлкәлә һәм йәмәғәт эштәрендә уңыш ҡаҙанған ҡатын-ҡыҙҙарҙы тәбрикләнеләр.**

# БӨГӨН ДӘ ДӨРЛӘЙ...

## Рабиға Ҡушаева ялҡыны

Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары һәр осорҙа ир-егеттәрҙең тоғро юлдашы ғына түгел, улар менән типә-тиң тороп ил-йөртто ҡурсылаусы ла, ғаилә усағын һаҡлаусы ла булған. Әммә бөгөнгө гүзәл заттарыбыҙға хас азатлыҡ рухын тәүгеләрҙән башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының граждандыҡ һәм сәйәси хоҡуҡтарын яҡлаусы булып сығыш яһаған Рабиға Ҡушаева исеме менән бәйләйбеҙ. Республикабыҙҙың гүзәл заттары 20-се быуат башында нигеҙ һалынған хәрәкәт ялҡынын һүндергәне юҡ. "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһына берләшкән ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ районларҙа, ауылдарҙа шул уҡ Рабиға Ҡушаева ялҡынын дәрләтә, үҙе йәшәгән мөхитте күҙ ҡараһылай һаҡлаусы ла, тәртип урынлаштырыусы ла, эргәтирәләгеләрҙе матур эштәргә, иманға, айыҡлыҡҡа өндәүсе лә улар. Ә "Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары йәмғиәте" ойошмаһы иһә арабыҙҙан Рабиға Йәнғол ҡыҙы кеүек шәхестәрҙе барлауҙы маҡсат итеп, "Ҡатын-ҡыҙ - милләт әсәһе" республика конкурсын ойоштора килә. Быйыл Башҡортостандан ғына түгел, Ырымбур һәм Силәбе өлкәләренән, Мәскәү ҡалаһынан 300-ҙән ашыу кеше конкурста ҡатнашырға теләк белдергән. Баһалама ағзалары ҡатнашыусыларҙың иң лайыҡлыларын "Ҡатын-ҡыҙ - мәҙәниәттә", "Ҡатын-ҡыҙ - әсә", "Ҡатын-ҡыҙ - лидер", "Ҡатын-ҡыҙ - ғалим", "Ҡатын-ҡыҙ - педагог", "Ҡатын-ҡыҙ - бизнес-леди", "Ҡатын-ҡыҙ - оҫтабикә", "Ҡатын-ҡыҙ - йыл үрнәге", "Оло быуын ҡатын-ҡыҙы", "Иң йәш йәмәғәт эшмәкәре" тип аталған номинациялар буйынса билдәләне. Ҡатын-ҡыҙға бер йылы һүҙ ҙә етә, тигәндәре дөрөҫ инде, баш ҡаланың оло сәхнәһендә тәбрикләнеү гүзәл заттарға дәрт-дарман өҫтәп, күңелдәрен осондороп ебәрҙе.

Конкурстың иң юғары наградаһы - Рабиға Ҡушаева исемендәге "Ҡатын-ҡыҙ - милләт әсәһе" миҙалы был юлы республика кимәлендә төрлө өлкәләрҙә юғары уңыштарға өлгәшеүсе ун ике кешегә тапшырылды. Был исемлеккә Стәрлебаш районынан Миңлехана Баһауетдинова, оҙайлы йылдар эшләгән педагогтар Зилә Япарова, Әбйәлилдән Зөһрә Бәшәрова, Яңауыл районынан атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Илсиәр Проскурякова, Өфөнән йәмәғәт эшмәкәре Ләлә Биишева, БР Фәндәр академияһы вице-президенты Райхана Ҡунакова, Теле-радиосәнғәт мәктәп-студия директоры Шәүрә Ғилманова, режиссер Луиза Фархшатова, Сибай ҡалаһының "Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары йәмғиәте" рәйесе Сажидә Ғәниева, Күмертау ҡалаһы "Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары йәмғиәте" рәйесе Римма Ғөбәйҙуллина, 40 йылдан ашыу хеҙмәт стажы булған уҡытыусы Сәриә Килдеғошова, ҡатын-ҡыҙҙар йәмғиәте хәрәкәте ағзаһы Илүзә Ғәйнуллина индерелде. Сараның тантаналы өлөшө тамамланғас, оло исемгә лайыҡ булған ҡатын-ҡыҙҙар менән һөйләшеү форсаты тейҙе. "Әсәйем Мәрйәм Йәғәфәрова өсөн дә, үҙем өсөн дә алдым был миҙалды. Сөнки мин ул өйрәткән тормош ҡанундарына буйһоноп йәшәйем, - тине Әбйәлил районы Теләш ауылынан Зөһрә Бәширова. - Милләт әсәһе - халыҡ яҙмышын ҡайғыртыусы тигән һүҙ ул, бөгөн беҙ ҡурсалар нәмәләр бик күп. Башҡорт халҡының теле, ғөрөф-ғәҙәте, рухи һәм матди байлыҡтары, йәш быуын тәрбиәһе - барыһын да ҡайғыртырға тырышабыҙ".

Байрам алдынан Башҡортостан ҡатын-ҡыҙҙарына ҙур бүләк итеп күркәм сара ойоштorған Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары йәмғиәте рәйесе Гөлнур Ҡолһарина ла һәҙөмтәләр менән ҡәнәғәт булыуын белдерҙе: "Быйыл һәр районһан төрлө номинацияла урындағы этаптарҙың еңеүселәре килде, улар араһында "Милләт әсәһе" тигән абруйлы исем йөрөтөрлөк ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ бихисап, - тине ул. - Ғөмүмән, гүзәл заттар ғаилә усағын һаҡлаусы ҡатын, әсәй генә түгел, ә илебеҙҙәге сәйәси процестарҙа, йәмғиәт эшендә ҡатнашып йөрөүсе әүҙем шәхес тә. Беҙ ҡатын-ҡыҙҙар хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан лидерҙар, өлгөлө балалар тәрбиәләгән, өлгөлө ғаиләләрҙә ҡатын-ҡыҙ булараҡ матур эштәр башҡарған, ҡул эше оҫталары һәм һөнәрмәндәр булған гүзәл заттарҙы киләсәктә лә ошондай проекттарҙа көтөп ҡалабыҙ".

**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА.**



ҠЫҘ-ҠАТЫН ҺҮҘЕ

# МИН - АЛЛАҺ ҠОЛО...



**Бала саҡтағы тәүге хыялым - космонавт булыу ине. Ул һүҙҙе әйтә белмәй, мин космонават булам, тип йөрөй торғайным. Унан һуң, ғәләмәт көслө кеше булғым килде. Көслөнөкө - замана, тигәнде тормош-уҡытыусы үҙе башҡа һуғып, артҡа тибеп аңлатты...**

Шуға көрәштән баш сыҡманы. Башта ҡусты-һеңлеләремде яҡлап һуғышһам, унан яҙмышҡа ҡаршы көрәшеп маташтым. Йәшәйештең төрлө ғәҙелһеҙлектәре менән яғалаштым. Йәмғиәттең минең күңел ҡалыптарына тура килмәгән яҡтары менән көс һынаштым. Шулайтып, бәлки, мин яугирмындыр ҙа әле...

Унан, шиғыр яҙа башлағас, мин, моғайын, шағирә булырға тейешмендер, тип уйланым. Был хыял-ниәтем бер ни тиклем бойомға ашҡандыр, бәлки. Шиғриәт йәшлегемдә асыҡтан-асыҡ әйтеп биреүгә өйрәнмәгән, күнекмәгән хистәрҙе сығарыу юлы ла булғандыр. Тора-бара ул ябай булмаған ысынбарлыҡты кешелеккә асыу, аралашыу формаһы ла булғандыр. Нисек булғанда ла мине бит Айһылыу итеп яҡындарым ғына, шағирә Айһылыу итеп уҡыусыларым белде. Ошо асылда ябай ауыл ҡатынынан илаһи бер йәнгә, илһамлы ҡошҡа, аҡыл эйәһенә, ҡыйыуға, уҫалға, нәзәкәтлегә лә әйләнә ала инем бит.

Аҙаҡ, тормош-йәшәйеш тураһындағы уйҙар баштан сыҡмай башлағас, аҙмы-күпме ғилем, аҡыл туплағас, шуға төшөндөм: мин - Аллаһтың ябай ғына бер ҡоло. Минең миссиям Ҡөрьәндә күптән яҙылған: "Мин ендәрҙе лә, кешеләрҙе лә бары тик Минә (Аллаһҡа) сәждә итһендәр, тип яраттым". Шулай булғас, минә үҙемдең төп миссиямды эҙләп баш ватаһы түгел. Башҡа миссиялар - бурыстар: ата-әсәмдең ҡыҙы, балалар әсәһе, ир ҡатыны, башҡорт милләте вәкиле, шағирәлек - икенсе, өсөнсө һ.б. планда. Ошо аҡылға юлыҡҡас, мин үҙем менән, тотош ғаләм менән гармонияла йәшәй башланым. Беҙ үҙебеҙгә үҙебеҙ проблема уйлап сығарырға яратабыҙ, ә бит бөтә проблема-һынауҙарҙы фәҡәт ғаләмдәрҙең Раббыһы менән, уның ярҙамында ғына йырып сығып була.

**Айһылыу ҒАРИФУЛЛИНА, шағирә.**

✓ *Хыялымдағы егетте донъяға айыҡ аҡыл менән ҡараған, мәҙәниәтле, эсмәгән, тартмаған, белемле тип күҙ алдына килтерәм. Салауат, Батырша, Кинйә кеүек батырҙарыбыҙға оҡшап, ҡыйыу, үткер, тәүәккәл булһын!*

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# ӨФӨЛӘ БАР БЕР УТРАУ,

## Зәйнәб Биишева исемен йөрөтә ул



**Ошо көндәрҙә Өфөнөң З. Биишева исемендәге 140-сы башҡорт гимназияһында әҙибәнең тормош юлы һәм ижадына арналған ижади проекттар республика конкурсы үткәрелде. Ярышта Салауат, Бөрйән, Әбйәлил, Илеш, Ҡалтасы, Благовар, Өфө, Иглин, Дүртөйлө, Күгәрсен райондарынан, Туймазы, Белорет, Янауыл, Өфө ҡалаларынан мәктәп уҡыусылары һәм балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүселәре ҡатнашты.**

Быйыл сараның биш секцияһында 140 ҡатнашыусы ғилми-тикшеренеү эштәренең һөҙөмтәһен, телмәр оҫталығын, актерлыҡ һәләтен һәм талант-тарын күрһәтте. Балаларҙың һүҙгә маһирлығын, туған телен белеү кимәлен, актерлыҡ һәләттәрен компетентлы жюри ағзалары баһаланы. "Быйылғы конкурс алдағы йылдарҙағына ҡарағанда ла юғарыраҡ кимәлдә үтте. Балалар баҡсаһынан килгән кескәйҙәр матур итеп сәхнәләштереүҙә сығыш яһаны, Зәйнәб Биишеваның ижадын белеүҙәрен күрһәтте. Зәйнәб Биишева башҡорт халҡының данлы ҡыҙы, һеҙ ҙә, Зөлфиә Ханнанова әйткәнсә, "Мин башҡорт, тип танышығыҙ", ҡәҙерле балалар", - тине конкурсҡа йомғаҡ яһағанда әҙибәнең һеңлеһе Ләлә Биишева. Уның һүҙҙәрен сәхнәгә күтәрелгән һәр кем ҡеүәтләне, сөнки барыһы ла башҡорт мөхитендә уҡыған һәм тәрбиәләнгән балалар үҫкәс тә үҙ тамырҙарын, туған телен онотмаһын, тип борсола. Ә инде ҡатнашыусыларға килгәндә, улар бүләкләү тантанаһында китаптар алып ҡыуанды, "Арғымаҡ" этно-төркөмөнөң йырҙарына ҡушылып йырланы ла, бейене лә.

Салауат районының Янғантау ауылынан килгән Алһыу Тойғонова "Зәйнәб Биишева - публицист" тигән секция эшендә ҡатнашҡан. "Мин район гәзитебеҙҙе булдырыуҙа әҙибә һәм уның иренең ниндәй ҙур өлөш индереүе тураһында презентация яһаным. Зәйнәб Абдулла ҡыҙы хәбәрселәрҙе туплап, гәзиткә мәҡәләләр яҙған, ә Ғәзиз Әминев редактор булып эшләгән. Был гәзит "Большевистик колхоздарға" тип аталған, ә бөгөнгө көндә ул "Йүрүҙән" атамаһын йөрөтә", - тине Алһыу үҙе белгән мәғлүмәттәр менән уртаҡлашып.

Бүләкләү ваҡытында тамаша залында башҡорт милли күлдәктәре кейеп, ҡулдарына уйынсыҡ тотоп ултырған ике ҡыҙ иғтибарҙы йәлеп иткәйне. Баҡтиһән, улар Зәйнәб Биишева исемендәге 140-сы гимназияның икенсе класс уҡыусылары Розалина Ураҙгилдина һәм Әлиә Ғабдулхәмитова булып сыҡты. "Әле генә "Аулаҡ өй" уйынын сәхнәләштереп күрһәттек, беҙ иң яҡын әхирәттәр, - тип кемуҙарҙан бәйән итте ҡыҙҙар. - Йәнеш, Емеш, Хәсбиямал булып уйнаныҡ, ете кеше ҡатнаштыҡ. Ата-әсәләре өйҙә булмағанда балалар бергә йыйылып, бутҡа бешерәләр, һәпәләк һәм "осто-осто" уйнайҙар. Беҙ хәҙер улайтып йыйылмайбыҙ инде өлкәндәр юҡта, тик мәктәптә генә ҡыуышып уйнайбыҙ".

Әйткәндәй, гимназия уҡыусылары талантлы ла, Зәйнәб Биишева тураһында мәғлүмәтле лә булып сыҡты. Конкурста "Башаҡ" хикәйәһен сәхнәләштереп, беренсе урын яулаған 3-сө класс уҡыусылары актерлыҡ һәләте менән дә һоҡландырҙы, яҙыусының әҫәрҙәрен яҡшы белеүе, белем усағына ни өсөн уның исеме бирелеүе тураһында ла шартлатып һөйләп бирҙе. "Зәйнәб Биишева - бөйөк яҙыусы, уның исемен йөрөткән гимназияла беҙ тик бишлеләргә уҡыйбыҙ, башҡортса һөйләшәбеҙ, бейейбеҙ һәм йырлайбыҙ", - тиҙәр был турала Таңсулпан Ниғмәтуллина һәм Ибраһим Ихсанов.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Өфөлә бер ғәжәп утрауҙа ултырабыҙ. Урамдарҙа башҡортса һөйләшкән кешеләрҙе бик һирәк осратабыҙ, ә бөгөн рәхәтләнеп башҡорт мәктәбендә туған телдә һөйләшеп кинәндек", - тигәйне ҡатнашыусыларҙы тәбрикләп журналист Сәрүәр Сурина. Ысынлап та, өлкән быуын өсөн ошондай һәр яҡлап та килгән балаларҙың үҙ мөхитендә, үҙаңлы һәм рухлы булып үҫеп килеүен күреүҙән дә ҙур шатлыҡ юҡтыр. Киләсәктә лә бөйөк әҙибәнең рухы белем усағы уҡытыусыларын һәм уҡыусыларын әйҙәгән яҡты маяҡ булып ҡалһын.**

**Камилә ҒӘЛИЕВА.**

ӘЙТӘГҮР!

# ХЫЯЛЫМДАҒЫҺЫ...

## бына шундай



**Һәр кем үҙенең икенсе яртыһын, мөхәббәтен табып, ғаилә ҡороп, һөйөү емештәре-сабыйҙар үҫтереп, был гүзәл тормошта бәхетле йәшәргә хыяллана. Бигерәк тә йәш ҡыҙҙар ярата хыял диңгеҙендә гиҙергә. Беҙ бер нисә ҡыҙға мөрәжәғәт итеп, уларҙың серле донъяһындағы бер генә һорауға яуап алырға батырсылыҡ иттек: буласаҡ тормош юлдаштарын нисек күҙ алдына килтерәләр икән?**

***Сәлимә, студент:*** Әлбиттә, күп ҡыҙҙар кеүек, минең дә хыялымда үҙ Алпамышам бар. Мин уны әлегә осратҡаным да, эҙләгәнем дә юҡ. Ул әлегә минең йөрәк түремдә генә йәшәй. Миңә буласаҡ тормош иптәшемдең машинаһы, фатиры һәм башҡа байлығы булыуы мөһим түгел, уның аҡыллы, иманлы, тәртипле булыуы шарт. Рухлы, тәүәккәл егеттәрҙе яратам. Мәүеш, ауыҙ асып һүҙ әйтә алмай торғандарҙы енем һөймәй. Ҡатын-ҡыҙҙы хөрмәт иткән, бүләктәр менән ҡыуандырырға яратҡан егеттәрҙе ниндәй генә ҡыҙҙар яратмаһын инде! Насар ғәҙәттәре (йәғни эскән, тартҡан, һүгенергә яратҡан) булған егеттәр менән мин бөтөнләй һөйләшмәйем.

***Гөлсәсәк, студент:*** Минең өсөн, иң беренсе, егет кешенең бөтә һорауҙарға ла яуап бирә алырлыҡ белемле булыуы шарт. Хыялымдағы егетте лә шундай тип күрәм. Ул мине өҙөлөп яратҡан, изге күңелле, йомшаҡ һүҙле булыр, тип ышанам. Дөрөҫөн әйткәндә, әлегә тиклем аралашҡан егеттәр араһында ундайҙар һирәк булды. Ниңәлер, күбеһе тупаҫ, эре һөйләшә, белемһеҙ генә булһалар ҙа, үҙҙәрен әллә кем итеп тота, алдарына маҡсат ҡуйып, шуға ынтылып йәшәй белмәй. Әҙ генә ҡаршылыҡ, бәләкәй генә проблема осраһа ла һығылып төшөргә әҙер тора. Етмәһә, проблемаларҙан сығыу, онотолоу өсөн шул егеттәр рюмкаға үрелә. Бәләкәй генә ҡаршылыҡтарҙан, донъя ауырлығынан ҡотолор өсөн үҙ-үҙенә ҡул һалып, ҡотолоуҙың еңел юлын һайлаған егеттәрҙе лә күрергә тура килгеләне. Ундай ҡурҡаҡ, көсһеҙ егет киләсәктә ниндәй атай булыр? Ҡатынына терәк, балаларына өлгө булып тора алырмы? Ғаилә ҡорһаң бит бөтәһе лә ал да гөл булмаясаҡ, ҡаршылыҡтары ла осрап торасаҡ. Ир менән ҡатындың мөхәббәте нәҡ шул саҡта һынала ла инде. Шуға ла ҡурҡаҡ егеттәр менән дуҫлашырға тырышмайым.

***Көнһылыу, студент:*** Мин ҡара сәсле, ҡара ҡашлы башҡорт егеттәрен яратам! Хыялымдағы егетте донъяға айыҡ аҡыл менән ҡараған, заман менән бергә атлаған, мәҙәниәтле, эсмәгән, тартмаған, белемле тип күҙ алдына килтерәм. Үҙебеҙҙең Салауат, Батырша, Кинйә кеүек батырҙарыбыҙға оҡшап, ҡыйыу, үткер, тәүәккәл булһын! Бына минең атайым тәү ҡарауға уҫал кеүек булһа ла, ул эстән шул тиклем йомшаҡ күңелле ине. Шул тиклем әсәйемде лә, беҙҙе лә ярата, бер ҡасан да ауыр эш эшләтмәй, сит-яттан бер һүҙ тейҙермәй ине, ғаилә дилбегәһен тулыһынса үҙе тартты, тиһәң дә була. Ғаилә башлығы кәрәгенсә уҫал да булырға тейештер, сөнки уның иңендә ҙур яуаплылыҡ ята бит. Хыялдағы Алпамышамды бер аҙ атайыма ла оҡшатам.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ҡыҙҙар хыялдарында ана ниндәй егеттәрҙе йөрөтә. Бер уйлаһаң, бар ҡыҙҙар ҙа бына шулайыраҡ итеп күҙ алдына килтерә үҙ иштәрен. Шуға ла егеттәргә өндәшәм: ҡыҙҙарҙың күңелен яулайбыҙ, тиһәгеҙ, улар һүрәтләгән һыҙаттарға эйә булырға, тәртипте яҡшыртырға, насар холоҡтарҙан арынырға тырышырға кәрәк була инде...**

**Зөлфиә СИБӘҒӘТУЛЛИНА яҙып алды.**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

Бик йыш беҙ эшләгән шарттар күҙҙәрҙең күсөргәнешен арттыра. Ярым ҡараңғылыҡта йәки былҡылдап торған экрандан, ныҡ яҡтыла йәки яҡтылыҡ кимәле ҡапыл үҙгәреп торғанда, хәрәкәт иткән транспортта йәки атлап барғанда уҡыу һөҙөмтәһендә нескә күреү механизмы боҙола. Әгәр ҡағиҙәләрҙе теүәл үтәгәндә һәм кире шарттарҙы күнекмә итеп файҙаланғанда күреү һәләте яҡшырасаҡ ҡына! Әммә күнекмәләргә күсерҙән алда, тәүҙә тест һорауҙарына яуап бирегеҙ.

## Офтальмология сирҙәрен асыҡлау өсөн тест

**Һорауҙарға "эйе", "юҡ" тип яуап бирегеҙ**

1. Китап уҡығанда, телетапшырыуҙар ҡарағанда күҙҙәрем тиҙ тала, ҡыҙара һәм йәшләнә.
2. Ҡайһы бер ваҡыт бер предметты икәү итеп күрәм, бигерәк тә көсөргәнешле эш ваҡытында; тиҙ арыйым һәм башым ауырта башлай.
3. Ҡайһы бер ваҡыт күҙ алдым ҡараңғылана.
4. Яҡтылыҡ сығанаҡтары тирәләй йәйғор төҫөндәге түңәрәктәр күренә.
5. Тар ғына коридор аша ҡараған кеүек күрәм.
6. Күҙҙәрем киҫкен генә ауыртып, башҡа бирә, шул ваҡытта күреү һәләте насарая.
7. Күҙ алдында ниндәйҙер яры, тап, тирләгән тәҙрә торған кеүек.
8. Ҡояшҡа сыҡһам, насар күрәм, бина эсендә күреүем яҡшыра.
9. Бер күҙемдә шаршау торған һымаҡ, икенсеһендә йәшен йәки төҫлө шарҙар күренә.

Беренсе һәм икенсе һорауҙар күҙҙәрҙең арығанлығын күрһәтә. Тәүге ике һорауға ыңғай яуап бирһәгеҙ, тимәк, күҙегеҙгә ял кәрәк. Күрәһең, һеҙ йә күрәшлек, йә үтәғарашлыҡ менән интегәһегеҙ, шул уҡ ваҡытта күреүҙе күҙлек менән коррекциялау дөрөҫ башҡарылмай. Кешеләрҙең 40 йәштән һуң уҡыу өсөн плюслы диоптриялы күҙлек кейеү ихтыяжы тыуа. Шулай итмәгәндә, баш ауыртырға, күҙҙәр ҡыҙарырға мөмкин.

Икенсе һорауға килгәндә, предметтар һәр ваҡыт түгел, ә ваҡыты-ваҡыты менән икегә әйләнә. Әгәр күреү көсөргәнеше ваҡытында ныҡ арыһағыҙ, шул ваҡытта бик йыш башығыҙ ауыртһа, бындай торош астигматизм хаҡында һөйләй.

Әгәр өсөнсө - алтынсы һорауҙарға ыңғай яуап бирһәгеҙ, был глаукома күрһәткесе булып тора. Күҙ алды ҡараңғыланыуы, яҡтылыҡ сығанаҡтары тирәһендә йәйғор төҫөндәге түңәрәктәр, күреү киңлеге тарайыуы - былар барыһы ла глаукомаға хас. Бигерәк тә алтынсы һорауға иғтибар йүнәлтке килә. Күҙҙәрҙәге киҫкен ауыртыу, уның маңлайға һәм сикәгә биреүе, күреү һәләтенең насарайыуы киҫкен глаукома өйәнәге хаҡында һөйләй. Әйткәндәй, бындай мәлдәр ҡыҫҡа ваҡытлы һәм ғүмер дауамында бер нисә өйәнәк булыуы ихтимал. Ҡайһы берәүҙәр 2-3 көн дауам иткән өйәнәктән һуң ғына табипҡа мөрәжәғәт итә. Бындай хәлторошта тиҙ арала табипҡа күренергә кәрәк, юҡһа, һуҡыр ҡалырға мөмкин.

**С. КУЗИНА.**
**(Дауамы бар).**

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# БӨЙӨКТӘРҘЕҢ ҠЫҘҘАРЫ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**9-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Сенат. Мәғәфүр. Тутыҡ. Носов. Вәкил. Обухова. Сабауыл. Ҡәләм. Гәрәев. Талҡы. Бау. Әрмәк. Лион. Икмәк. Нан. Ирис. Студент. Әтлек. Ейәнсәр. Вәкәләт.

**Вертикаль буйынса:** Светлана. Нәбиуллин. Ултырғыс. Миро. Тикеев. Волга. Сәғәт. Болид. Ерәнсә. Төхвәтуллин. РТР. Тараҡ. Рәт. Ваҡ. Әнисә. Әмер. Әҫтә. Ләм. Кәкүк.

*ИҒТИБАР!*



# САЛАУАТТАР САҠЫРА

**Салауат дәүләт башҡорт драма театры баш ҡалаға гастролдәр менән килә. Г. Ғиззәтуллинаның "Йәннәт һулышы" һәм А. Финктың әҫәре буйынса "Голубцы" спектаклдәренән торған гастролдәр тураһында журналистар менән осрашыуҙа театрҙың ижади коллектив етәксеһе Рөстәм Фазылов, режиссер Илсур Ҡаҙаҡбаев һөйләне.**

Бөгөнгө режиссерҙарҙың проза әҫәрҙәренә йышыраҡ мөрәжәғәт итеүен күҙәтәбеҙ. Башҡорт яҙыусылары ижадын сәхнәгә сығарыуҙың, ошо рәүешле милли әҙәбиәткә ҡыҙыҡһыныу уятыуҙың бер насар яғы ла юҡ, тине режиссер Илсур Ҡаҙаҡбаев "Йәннәт һулышы" спектаклде тураһында. Спектаклдең сценарий авторы Зөһрә Бураҡаева ла әҫәрҙең һәм уның буйынса ҡуйылған спектаклдең йәки төшөрөлгән киноның бер-береһен тулыландырыуын әйтте: "Был повесты уҡығандар спектаклде ҡарағандан һуң уны тағы ла яҡшыраҡ аңлаясаҡ. Ә кем спектаклде күрәсәк, ул уны уҡығыһы ла киләсәк, сөнки ул ҡыҙыҡһыныу уятасаҡ. Гөлсирә Ғиззәтуллина үҙ әҫәрҙәрендә кешене нисек бар - яҡшы яҡтары, етешһеҙлектәре менән - шулай һүрәтләй. Уға бөгөнгө заман тамашасыһы күнеккән "хэппи энд" - әҫәрҙең бәхетле тамамланыуы кәрәкмәй. Герой үҙендә үҙ-үҙен ҡотҡарырлыҡ рухи терәк таба икән, бының әҫәрҙә берҙәнбер "хэппи энд" булыуы ла ихтимал. Уға башҡа тыштан килгән ярҙам кәрәкмәй. Прозала ҡулайлы булған был алымды сәхнә әҫәрендә сағылдырыуы ауыр, бында геройҙың эске донъяһын асыу башҡараҡ ысулдар менән бара".

Һәр хәлдә, салауаттарҙың был спектакле режиссер алымдары менән дә ҡыҙыҡлы булмаҡсы. "Йәннәт һулышы"н Башҡорт дәүләт академия драма театры сәхнәһендә 12 һәм 18 мартта күрергә мөмкинлек буласаҡ. 14 мартта иһә Салауат театры баш ҡала тамашасыһын "Нур" Өфө татар дәүләт театрында "Голубцы" тип аталған комедияға көтә. Иренең үҙенә ҡарата һалҡынлығынан арыған ҡатындың "Иремде яҡшы ҡулдарға бирәм" тигән игланы ниндәй ваҡиғаларға килтерәсәк? Спектаклдең режиссеры - Илнур Муллабаев.

**Ләйсән ДАЯНОВА.**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

***1440 һижри йыл.***

| Март (Рәжәб) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ахшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 11 (4) дүшәмбе | 6:14 | 7:44 | 13:30 | 17:39 | 19:09 | 20:39 |
| 12 (5) шишәмбе | 6:12 | 7:42 | 13:30 | 17:41 | 19:11 | 20:41 |
| 13 (6) шаршамбы | 6:09 | 7:39 | 13:30 | 17:43 | 19:13 | 20:43 |
| 14 (7) кесе йома | 6:07 | 7:37 | 13:30 | 17:45 | 19:15 | 20:45 |
| 15 (8) йома | 6:04 | 7:34 | 13:30 | 17:47 | 19:17 | 20:47 |
| 16 (9) шәмбе | 6:02 | 7:32 | 13:30 | 17:49 | 19:19 | 20:49 |
| 17 (10) йәкшәмбе | 5:59 | 7:29 | 13:30 | 17:51 | 19:21 | 20:51 |

***"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.***

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**9 март "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия 12+
**10 март "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович) 16+
**13 март "Руди - never off..."** (А. Абушахманов), Рудольф Нуриевтың ғүмер миҙгелдәре 12+
**15 март "Сыңғыҙхандың аҡ болото"** (С. Айытматов) 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**14 март "Мөхәббәт һәм нәфрәт"** (З. Биишева әҫәре буйынса), музыкаль риүәйәт 12+
**15 март "Беҙҙең өйҙөң йәме"** (М. Кәрим), хәтирәләр 6+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**9 март "Дюймовочка"** (Г.-Х Андерсен). 12.00, 14.00 0+
**10 март "Три поросенка"** (С. Михалков). 12.00, 14.00 0+
**9, 10 март "Любовное приключение"** (В. Аношкин). 18.00 18+
**15 март "Мустай Карим. Близкий горизонт"** (В. Аношкин), спектакль-портрет. 18.00 12+

ҠЫҘ-ҠАТЫН ҺҮҘЕ

# МИН - ИЖАДСЫ



**Ҡатын-ҡыҙҙы тәбиғәт үҙе үк ижадсы булмышлы һалып яралтҡан. Шуға ла донъялағы һәр төрлө ижадҡа хас матурлыҡ, нәфислек, аһәңлелек кеүек һүрәтләү һыҙҙарен гүзәл затҡа ҡарата ҡулланырға ла күнеккәнбеҙ. Ә һөнәрен ижад менән бәйләүсе ҡатын-ҡыҙға был тормошта йәшәүе нисек икән? Ошо турала М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрының йәш актрисаһы Дания ҒӨБӘЙҘУЛЛИНА менән әңгәмәләшәбеҙ.**

**▸ Дания, әлеге мәлдә театрҙа өр-яңы спектакль сәхнәгә сығып тора. Һеҙ унда ниндәй роль башҡараһығыҙ?**

- Ысынлап та, Зөлфәт Хәким әҫәре буйынса "Килә яуа, килә яуа" тигән комедия сәхнәгә сыға. Ул бик сетерекле ваҡиғаға, тормошта осрап ҡуя торған хәлгә ҡоролған, тиһәк тә була. Мин Зәйнәбте, һөйәркәне уйнайым. Бер уйлаһаң, ғаилә тыныслығына янаған һөйәркә кире герой инде ул, әммә минең өсөн был роль яңы үсеш, яңы тәжрибә. Етмәһә, ул характерлы роль, шуға мауығып эшләнем. Серҙе аҙ ғына асам, спектаклдәге йомғаҡ сиселә бара Зәйнәбте һөйәркә тип атап та булмаясаҡ. Һәр кем тормошта бәхет, мөхәббәт эҙләй - был һәр кемгә хас. Премьера ла ошо турала. Тамашаһы көләп, ял да итер, бәлки, ситтән ҡарап, үҙҙәрен дә танып ултырыр, кем белә?

Актер партнерҙары менән үсешә. Әгәр ҙә ул һине күрһә, ишетһә, эшләүе лә еңел. Режиссер Рөстәм Хәкимовтың был йәһәттән һиҙемләүе көслө. Рәхәтләнеп эшләнек был спектаклдә лә. Нәғим Нурғәлин, Венер Кәләмов, Рәмзил Сәлмәнов, Аида Ҡулбаева, Ләйсән Миңлеғәлиева, Лилиә Исҡужина менән бер уйлы булып ижад иттек. Беҙҙең башҡорт театры тамашаһында тағы бер бүләк - ул спектаклдең йырлы-бейеүле булыуы. Венер Кәләмовтан яңы йырҙар ишетергә теләһәгеҙ, рәхим итегеҙ.

**▸ Әленән-әле төрлө холоҡтарҙы уйнауы, күпмелер арауыҡ геройыңдың яҙмышын "йәшәп" алыуы ҡыйын түгелме?**

- Актерҙарҙы, бала кеүек булығыҙ, тип өйрәтәләр. Йәғни, тормошто бала кеүек, ихласлыҡ, бер ҡатлы тәбиғилек менән ҡабул итергә тейешбеҙ. Беҙ гел эргә-тирәбеҙҙәгеләрҙе күҙәтеп, ҡылыҡтарының сәбәбен өйрәнеп йөрөйбөҙ, тәжрибә лә шулай туплана. Беҙ төрлө булырға тейешбеҙ. Быны әле генә мин әтте уйнағайным, тулҡын да булғайным, бөгөн мин һөйәркәне һынландырам, дөрөҫөрәге, ысынлап та ошо роль менән йәшәп ятам. Мине белгәндәр аптырай, көйефең шулаймы ул, нишләп һин улай ҡыланһыҡланаһың әле, тиҙәр.

**▸ Улайһа, актерҙың үҙенең тормошо бармы? Әллә ул үҙе уйнаған ролдәр, характерҙарҙан туҡылғанмы? Сәхнә һәм ысынбарлыҡ араһында сик бармы?**

- Был сикте ҡуйырға кәрәк. Роль эшләгән мәлдә сик бер аҙ юйылып китһә лә, тормошта мин үҙем булырға яратам, бер ҡасан да уйнамайым. Сәхнәне һәм ысынбарлыҡты айыра беләм, Аллаға шөкөр. Ә тормошон сәхнәгә әүерелдергәндәрҙе аңламайым да. Һуңғы йылдарҙа күбәйеп киткән "психолог"тарҙың "Уйна, юхала, бүләк, аҡса һорай бел", тигәнәрәк тренингтарын да хупламайым. Әлбиттә, ғаилә тормошонда бер аҙ йомшағыраҡ, иркәрәк булыу кәрәктер, әммә беҙҙең менталитетҡа хас булмаған нәмәләрҙе беҙгә көсләп тағырға кәрәкмәйҙер, тип иҫәпләйем.

**Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.**

# МИН - ШАҒИРӘ



**"Шағирәлегем" бынан байтаҡ йылдар элек, тап 8 март байрамы айҡанлы асылды.**

Апайҙарымдың береһе ҡатын-ҡыҙҙар көнө алдынан шиғыр ятлағандыр, күрәһең. Ул ятлаған шиғырҙың "әсәйҙәр ҙә шат бөгөн, атайҙар ҙа шат бөгөн" тигән юлдарын мин дә ҡысҡырып ҡабатлайым. Нисә йәштәрҙә икәнемде хәтерләмәйем, бәләкәй инем: "р" өнөн әйтә алмайым, ултырғыска ла үҙаллы менә алмайым әле. Һөйләүем ҡыҙыҡ тойолғандырмы, мине күтәреп ултырғыска баҫтыралар ҙа, теге шиғырҙы ҡабат-ҡабат һөйләтәләр, ҡул сабалар. Ҡул сабып күтәрмәләүсе булғас ни, үҙемә лә оҡшап киткәндер инде был "һөнәр" - нисә һораһалар, шул тиклем һөйләйем, "Әсәйҙәр ҙә шат бөгөн, атайҙар ҙа шат бөгөн" менән генә туҡтамайым, өйөбөҙҙә кем бар, барыһының да исемдәрен ҡушып әйтеп сығам, уларҙы ла "шатландырам". "Мин үҙем дә шат бөгөн!" тип тә эбәрәм...

Үҫә төшкәс, һөнәремде кеше күҙенән йәшерә башланым. Һыуға барам да яр буйындағы ҡыуаҡтарға, ағастарға, һыуҙағы "үҙемә" концерт күрһәтеп ҡайтам: шиғыр һөйләйем, үҙем сығарған көйгә йырлайым, бейейем... Ҡайтҡас, һыу буйында оҙаҡлағаным өсөн эләгә, әлбиттә. Юҡ, барыбер туҡтамайым ул шөғөләмдән. Күрше - тирәләге тиҫтерҙәрем белеп бөттө ул ғәҙәтемде: һыу ташый башлауымды күреп ҡалдырмы, йәшеренеп кенә барып күҙәтеп торорға әүәҫләнеп алдылар. "Һөнәрем" фаш ителде, ә ғәҙәтемдән арына алманым. Яңғыҙ ҡалдыммы йә күңелем болоҡһой башланамы, тауҙай шатлығым бармы - шиғыр һөйләргә тотонам әле лә. Хатта күңелемә урын таба алмаған саҡтарҙа ла ҡысҡырып шиғыр һөйләйем. Шиғырҙы тойорға ла, һөйләп кенә түгел, шиғыр яҙып, шатлыҡ бүлешергә йә дауаланырға кескәй генә саҡтан минә өйрә йөрөгән шул ғәҙәтем өйрәткәндер, тием. Эйе, хәҙер үҙем дә, тамашасыларым да, офоҡтарым да, үҙ-үҙемә ҡуйған талаптарым да бүтән. Ҡул сапһындар өсөн генә яҙмайым. Шағирлыҡтың асылы - әйтер һүҙең булыу, күргән-кисергәненде, тойғандарыңды һөйләп биреү түгел, ә үҙеңсә генә итеп һүрәтләй белеү. Шағирлыҡ шуны аңлаған көндән башланалыр, моғайын.

**Ғәлиә КӘЛИМУЛЛИНА.**

# МИН - БӘХЕТЛЕМЕН



**Тормош шул тиклем ҡыҙыҡ, көтөлмәгәнсә һәм ҡатмарлы икән ул! Бына минең хеҙмәт юлым да көтмәгәндә бөтөнләй икенсе яҡҡа, журналистиканан урман хужалығы тармағына боролоп китте.**

Ял иҫәбенә ижад итһәм дә, эшемдән ныҡ ҡәнәғәтмен. Туғыҙ йыл инде көндәр буйы цифрҙар, аналитик мәғлүмәттәр менән теүәл эш итәм. Ҡыҙыҡ, шул нисектер минең хисле, уйсан асылыма тап килә. Хеҙмәтем талап иткәнсә, аналитик фекер йөрөтөү ижадыма ынғай йоғонто яһай. Шуға ла яңыраҡ ҡапыл ғына хикәйә яҙырға булып киткәнмендер, тим. Шағирә хисле, елбәҙәк, үтә күренмәле була, тип уйлай ҡайһы берәүҙәр. Хыялланып, ил гиҙеп, хозурланып ҡына йөрөп, яҡты шиғырҙар яҙһаң икән дә ул! Тик ул саҡта әҫәрҙәрең күбек кеүек күперек булыр кеүек. Шағирҙа тормоштан аллығөллө сәскәһе генә түгел, тоҙло-борсло аяныслы ваҡиғалары ла тос фекер, баҙыҡ биҙәктәр өҫтәй шул.

Мин һәр негативтан, ауыр ситуациянан файҙа табырға тырышам. Йән көйә, һаулыҡ ҡаҡшай, хәлиәнән сығырырға ла мөмкин уйламағанда бәкәлгә килтереп һуҡҡан насар хәлдәрҙән. Ни хәл итәһең. Бирешергә ярамай. Үҙеңде-үҙең аяҡҡа баҫтырһаң да, алға атлайһың. Һабаҡ алаһың. Шуныһы ҡыҙыҡ, йән яраһын бөтәйтергә ижадың ғына ярҙам итә. Яҙып-яҙып күңелеңде бушатаһың. Шуға ла мин Аллама мең рәхмәтлемен. Тел аҫкыстары биргәненә, үҙемде аңлаған тормош юлдашы һәм мине өрмәгән ергә ултыртмаған балаҡайҙарымды бүләк иткәненә. Мин ныҡ бәхетлемен. Мин барыһына ла ныҡ ризамын.

**Тәнзилә ДӘҮЛӘТБИРҘИНА,**
**Ш. Бабич исемендәге республика йәштәр дәүләт премияһы лауреаты, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БӨЙӨК КЕШЕЛӘРГӘ...

## баҫалҡы булыу ауыр

Айғыр малға ни етә, йөрөй белгән кешегә; тыуған илгә ни етә, ҡәҙерен белгән кешегә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Аллаһы Тәғәлә ир-егетте барлыҡҡа килтергән дә, һуңынан, мин ҙурыраҡҡа һәләтле тиеп, ҡатын-ҡыҙҙы булдырған.

**(Адела Сент-Джон).**

Баҫалҡы булыу ауыр. Бигерәк тә минең кеүек бөйөк кешеләргә.

**(Мохаммед Али).**

Аллаһы Тәғәләнең көләүен теләһәгеҙ, уға үҙегеҙҙең пландарығыҙ тураһында һөйләгеҙ.

**(Вуди Аллен).**

Ҡатын-ҡыҙҙар үҙҙәре ҡалдырмаған яралар өсөн генә беҙҙе йәлләй.

**(Жан Ануй).**

Тамаша залы бер нисә кеше көлгәс кенә көлә башлай. Һорау тап шул бер нисә кешене көлдөрөүҙә тора.

**(Марсель Ашар).**

Тормош иптәшенең нисек балыҡ ҡармаҡлап ултырыуын бер тапҡыр ҙа күрмәгән ҡатын үҙенең ни тиклем түҙемле кешегә кейәүгә сығыуын аңламайҙыр әле.

**(Эдгар Хау).**

Һүҙ көрәштереү аҡыллы менән ахмаҡты тыңлаштерә һәм ахмаҡтар быны яҡшы белә.

**(Оливер Уенделл Холмс)**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Чжуан-Цзыҙың ҡатыны вафат булған һәм Изгелек ҡылыусы уны күрергә килгән. Чжуан-Цзы инде урынында ултырып, шым ғына йыр һуҙған. Шул ваҡыт Изгелек ҡылыусы:**

**- Һеҙҙең менән ҡартайған көнгә хәтлем ғүмер иткән, матур балалар үҫтергән мәрхүм ҡатынығыҙ өсөн иламауығыҙ етмәгән, йырлап ултыраһығыҙ. Был бигерәк түгелме? - тигән.**

**- Юҡ, хаталанаһығыҙ, - тип яуаплаған Чжуан-Цзы. - Ҡатынымдың үлеүе мине ғазапландырмаҫ инеме ни? Мин бөйөк инем, ләкин аҙаҡтан ин тәүҙә, ҡатыным тыумаҫ борон, тәне лә, йәне лә булмаған саҡ тураһында уйлай башланым... Башта бит йән үҫешкән, уға, камиллашып, тәне ҡушылғас ҡына ғүмер башланған. Кеше гел ниндәйҙер яңы үҙгәрештәр кисерә. Әле лә ҡатыным яңы үҫеш - үлем аша үткән. Былар бөтәһе лә бер-береһен йыл миҙгелдәре кеүек алмаштыра барған: яҙ һәм көҙ, йәй һәм ҡыш... Хәҙер илау, һыҡтау - ул йәшәүҙе аңламау, тигән һығымтаға килгәс, мин йәнә илауымды туҡтаттым".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
"Башҡортостан нәшриәте" дәүләт унитар предприятиеһы типографияһында баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13)

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 7 март 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4077
Заказ - 188